*✓Бер милләт вәкилдәре, бер ғаилә ағзалары кеүек, үҙ-ара иң яҡшы мөнәсәбәттә булһа, ошо ҡәрҙәшлек, заман һәм аралар алыҫлығына ҡарамай, өҙөп булмаҫлыҡ рухи бәйләнеш аша иң бейеккә күтәреләсәк. Әммә ләкин бөтәһе лә әле әйтелгәнгә ҡапма-ҡаршы килһә, йәғни ҡәрҙәштәр бер-берәһен ашаһа, үҙ-ара һуғышһа, бер-берәһенә ҡарата нәфрәттә булһа, теләктәшлек итмәһә, ул милләттең киләсәге юҡ.*

*Абдулла Карни.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8 - 14 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№6 (580)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Затон бисҭәһендә...**



бар бер мәктәп

5

**Рәсәй өсөн башын һалғандар,**

йәки Беренсе донъя һуғышы геройы, башҡорт генералы Рауил Сыртланов тураһында



7

**Ат арбаһын һөйрәп ҡара-**

ёнеүҙәргә юл шунан да башлана



8-9

**Йоғошло ауырыуҙар мәкерен...**

кешелектең еңә алыуы икеле



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй фәне көнөн билдәләгәндә был өлкәләге ниндәй ҡаҙаныштар һәм проблемалар хаҡында һөйләргә була?

***Роберт ЯҠШЫБАЕВ, физика-математика фәндәре докторы, БДУ профессоры:*** Һөнәри көндәрҙе билдәләү ғәҙәткә инде беҙҙә, ләкин был байрам түгел, әлбиттә. Киреһенсә, календарҙағы бына ошондай даталар теге йәки был һөнәр өлкәһе, ошо өлкәлә хеҙмәт итеүселәр, уларҙың эш шарттарына иғтибарҙы йүнәлтеп, проблемаларҙы барлап алыу мәле лә тип аңлайым мин үҙем. Шуға күрә Рәсәй фәне көнө айҡанлы ҡайһы бер мәсьәләләр хаҡында һүҙ йүгертеп алыуҙың бер ғәйебе лә булмаҫтыр, моғайын. Сөнки был өлкәлә бөгөн проблемалар байтаҡ.

**Үткән йыл илдә фән системаһын үҙгәртеп ҡороу йылы булды. Киң йәмәғәтселек менән тикшереп-нитеп тормаҫтан, Рәсәй Фәндәр академияһын үҙгәртеп ҡороу тураһында закон ҡабул ителде. Минеңсә, Дәүләт Думаһы тарафынан бик уйлап еткерелмәгән аҙым булды был. Шулай уҡ академик йәмәғәтселек тә илебеҙҙең фән бишеген яҡлап, бер ауыҙ ҙа һүҙ әйтә алманы. Был, берҙән, Академия "руле артында" ил етәкселеге менән диалог ҡора алырҙай элеккеләр - М.В.Келдыш, А.П. Александров, Г.И.Марчук кеүек абруйлы фән "әзмә-үерҙәре" булмағанлыҡтан килеп сыҡһа, икенсенән, был Рәсәй Федерацияһы ағзаларының, ғилми йәмәғәтселектең чиновниктар кастаһына ҡаршы тора алмауын, еңелеүен күрһәтте. Һуңғы ун йыллыҡ осор эсендә Рәсәй Фәндәр академияһы бер генә тапҡыр ҙа илдәге ҙур халыҡ хужалығы мәсьәләләрен атҡарышыу бурысына йәлеп ителмәне.**

Үткән быуаттың 40-50-се йылдары, хәтерләүегеҙсә, атом һәм термоядро ҡоралын булдырыу бурысы атҡарылып, Курчатов, Королев, Келдыш, Ландау, Сахаров кеүек академиктарҙың исемдәре бар донъяға билдәлелек алды. Бына ундайҙар менән инде ил етәкселеге иҫәпләшмәй булдыра алмай ине, әлбиттә. Илдә генә түгел, донъя кимәлендә фәнде алға һөйрәүселәр ҙә, Академия мәнфәғәттәре өсөн ҡалҡандай тороусылар ҙа улар ине.

Ә бөгөн... Бөгөн инаныу Аллаһы итеп фән түгел, ә дин тәғлимәттәре һеңдерелә кеше аңына. Ил халҡы саҡрымдарға һуҙылған сираттар тороп, "изге" алтын пластиналарға табына һәм унан мөғжизә, ә сирлеләр һауығыу көтә. Фәндең әһәмиәтен күрәләтә түбәнһетеү, был өлкәне лә америкаса, көнбайышса моделдә үҙгәртеп ҡороу тенденцияһы бара, минеңсә. Был илдәрҙә беҙҙәге кеүек Фәндәр академияһы юҡ, фәнни-тикшеренеү эшмәкәрлеге менән университеттар шөғөлләнә. Уның ҡарауы, сит илдәрҙә фән өлкәһенә беҙҙәгенә ҡарағанда тиҫтәләрсә, йөҙҙәрсә тапҡырға күберәк аҡса һалына һәм хөкүмәт тарафынан ғына түгел, ә шәхси корпорациялар яғынан да бик ҙур ярҙам күрһәтелә.

Исмаһам, үҙебеҙҙең республикала фәнни потенциалды һаҡлап ҡалыу өсөн ниҙәр эшләргә һуң? Минеңсә, беҙгә республикабыҙ университеттары менән Өфө ғилми үҙәгенең фәнни академик учреждениелары араһында интеграцияны көсәйтергә кәрәк. Ғилми-тикшеренеү институттары университеттарҙа үҙҙәренең нигеҙ кафедраларын булдырырға тейеш. Икенсенән, БР Фәндәр академияһы эшмәкәрлеген, финанслау бик ҡойто булыуын иҫәпкә алып, ҡайтанан ҡарап сығырға һәм уның ҡеүәттәрен республикабыҙ, ошо төбәк өсөн хас һәм мөһим булған йүнәлештәргә ҡороу маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тигән фекерҙәмен. Шул осраҡта бюджеттан финанслау ҙа тейешле кимәлдә булыр ине. Башҡа йүнәлештәрҙе дәүләт финанслауы махсус программалар рәүешендә һәм конкурс нигеҙендә башҡарылыуы ихтималдыр, тип уйлайым. Нисек кенә булмаһын, әлегесә барған үҙгәртеп ҡороуҙарҙан мөмкин тиклем юғалтыуҙарһыҙ сығыу юлдарын билдәләп эҙләргә һәм Башҡортостанда фәндең абруйын һаҡлап ҡалырға тейешбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТКӘНДӘЙ...



## ХОККЕЙ ЯРЫШТАРЫН...

### түҙемһеҙлек менән көтәм

**Сочиҙа үткән XXII ҡышҡы Олимпия уйындары айҡанлы башҡорт спортсыларының фекерҙәрен ишеттереүҙе дауам итәбеҙ.**

**Байрас АБДУЛЛИН, йәш хоккейсы, Өфөнөң Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының 9-сы синыф уҡыусыһы, "Салауат Юлаев-1998" үҫмерҙәр клубы тәрбиәләнеүсеһе:** Уйындарҙың тап Рәсәйҙә үтеүенә беҙ, спортсылар, бигерәк тә ҡыуанабыҙ. Сөнки улар Рәсәй спортсылары, тамашасылары, көйәрмәндәре өсөн өр- яңы һынау һәм тәжрибә майҙаны ла булып тора. Айырыуса беҙҙең кеүек йәш спортсылар өсөн кәрәк бындай саралар. Мин әле ҙур түҙемһеҙек менән хоккей һәм биатлон ярыштары башланырын көтәм. Хоккейҙа Рәсәй йыйылма командаһының уңышлы сығыш яһарына өмөтөм дә, ышанысым да ҙур. 2006 йылдан "Питтсбург Пингвиндары" ("Питтсбург Пингвинз") командаһы өсөн НХЛ-да уйнаусы Магнитогорск егете Евгений Малкиндың уйнауын айырыуса ҙур иғтибар менән күҙәтәсәкмен. Олимпия уйындарында Рәсәй исеменән сығыш яһаясаҡ хоккейсылар исемлегенә "Салауат Юлаев"тан бер кем дә эләгә алмауы күңелде ҡырҙы, әлбиттә. Уның ҡарауы, был факт миңә һәм минең менән бергә шөғөлләнгән егеттәргә үҙенсәлекле стимул да бирә. Киләсәктә Өфөбөҙгә, Башҡортостаныбыҙға тап төшөрмәҫбеҙ! "Салауат Юлаев" командаһының данын юғары тоторбоҙ. Ә әлегә тренерҙарыбыҙ ҡанаты аҫтында күнекмәләр, күнекмәләр...

ИШАРА

# БИК ҮК ҠЫУАНДЫРМАЙ...

## ауылдан килгән хәбәрҙәр

**Ауылдашымдың сираттағы хатын алдым. Ауылдағы хәлдәр тураһында яҙған. Ә ул хәлдәр бар ауылдарҙағы һымаҡ, йәнде әрнетерлек.**

Ауылда тыуып, ҡалала балалар йортонда үҫтем, йәшәнем. 1961 йылда ғына ауылымды ҡайтып күрҙем һәм күп йылдар буйы хат аша ундағы хәлдәрҙе белешеп торам. Ауылыма элек ҡалын урман аша үтеп кенә барып етеп була ине. Хәҙер урман йыҡарған, тегендә лә, бында ла ағас төпһәләре һерәйеп ултыра. Йоҡарһа ла, ағаслыҡҡа инеп булмай, ботаҡтар сереп, ағас оно (әпилкә) менән ҡапланып, баҫыр урын ҡалмаған. Бер ауылда ғына 16 пилорама булһынсәле! Хәҙер һәр бер йүнсел кеше урман ҡырҡа, ләкин ата-бабалар ҡағиҙәһен күҙәткәндәр, йәғни бер ҡырҡылған ағас урынына икене ултыртыу тураһында уйлағандар һирәк. Тағы шул: ауылда яңы йорттар арта - быныһы яҡшы һымаҡ. Әммә ул йорттарҙың күбеһе ял көндәрендә, йәй ваҡытында килеп ял итеп китеүселәрҙеке икән. Килеп-китеп кенә йөрөүселәр тәбиғәт, ауыл именлеге тураһында уйлаймы икән һуң?..

Иғтибарығыҙға бер фәһем алырлыҡ күренеш тураһында яҙып үтмәксемен. Телевизор аша бик күптән ҡарағайным был хаҡта. Тымыҡ океанда кескәй генә бер утрау табылған. Сәйәхәтселәр "Пасха" утрауы тип атаған уны, сөнки ул пасха байрамы көндәрендә табылған. Ул утрауҙа бер кем дә йәшәмәй. Ағастар ҙа, йәшеллек тә юҡ унда. Тик яр буйына теҙелеп, бер меңгә яҡын вулкан ташынан яһалған ҙур һындар ғына (истукандар) һерәйеп баҫып тора, ти. Вулкан таштары карьерында әле яһалып бөтмәгән һындар ҙа табылған. Хәҙер был күренеш буйынса тарихсылар, ғалимдар баш вата. Ә һорауҙар күп. Был утрауҙа ниндәй халыҡ йәшәгән, ул халыҡ ҡайҙа киткән? Ҙур "истукан"дарҙы нинә яр буйына диңгеҙгә ҡаратып (күҙҙәрен аҡ таштан яһап йәбештергәндәр) теҙгәндәр? Нисек ул бик ҙур һындарҙы утрауҙың бер осонан икенсе осона күсерә алғандар?

Ғалимдарҙың иң һуңғы яуабы әлегә шулай: был утрауҙа йәшәгән халыҡтың һәр быуыны үҙҙәре инанған илаһҡа һәйкәл ҡуйып, мәрхәмәтлек көткән һәм утрауҙа үҫкән ағастарҙы ҡырҡып, "истукан"дарҙы бүрәнәләр ярҙамында яр буйына тәгәрәтеп алып барып урынлаштырған. Ағастарын ҡырҡып бөткәс, был утрауҙа йәшәү мөмкинлеге лә бөткәндәр һәм халҡы утрауҙы ташлап, күсеп киткәндер.

Ә икенсе ғалимдар был утрауҙың хәлһеҙләнгән халҡына ниндәйҙер ҡырағай ҡәбилә ябырылған, тип фаразлай. Сөнки утрауҙа ауҙарылған таш һындар ҙа бар икән. Әммә был урында уны яулап алған ҡәбилә лә йәшәй алмаған, әлбиттә, сөнки бында ағастар ҙа, йәшеллек тә ҡалмаған булған бит...

Осраҡлы ғына табылған был кескәй утрау, яр буйына теҙелгән меңәрләгән таш һындар кешеләргә фәһем алырлыҡ миҫал түгелме? Тәбиғәттең байлығын һаҡсыл ҡулланмаһаҡ, уны вәхшиҙәрсә ҡырыуҙы дауам итһәк, ер йөҙөндә бер саҡ беҙ төҙөгән бейек-бейек йорттар ғына тороп ҡалыр ҙа, тик ул йорттарҙа йәшәүселәр булмаҫ, тип ҡурҡыта...

**Айгөл АХУНОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй фәне көнөн билдәләгәндә был өлкәләге ниндәй ҡаҙаныштар һәм проблемалар хаҡында һөйләргә була?

**(Башы 1-се биттә).**

***Райхана ҠУНАҠОВА, БР Фәндәр академияһы вице-президенты, химия фәндәре докторы, академик:*** Башҡортостанда бөгөн иң күренекле фән учреждениеларының береһе - республикабыҙ һәм уның күп милләтле халҡының үҫешен фәнни йәһәттән тәьмин итеүсе БР Фәндәр академияһы ул. Академия ғалимдарының һуңғы йылдарҙағы иң мөһим ғилми-тикшеренеү эшмәкәрлеге һөҙөмтәләре иҫәбенә мин тәү сиратта ете томлыҡ "Башҡортостан энциклопедияһы"ның һәм Рәсәйҙә әлегә берҙән-бер булған "Башҡорт халҡының тарихы" 7 томлыҡһының нәшер ителеүен атар инем. Өфө-II ҡаласығының археологик ҡаҙылмалары материалдарын фәнни нигеҙҙә тикшереү дауам итә. Республикабыҙҙа демографик үҫеш һәм үлем күрһәткестәрен кәметеү буйынса тәҡдимдәрҙе өйрәнеү буйынса йыллыҡ аналитик доклладтар әҙерләү буйынса эш башланды. Башҡортостанда аэроэкологик хәүефһеҙлекте тәьмин итеү, республикала дәүләт ғаилә сәйәсәте Концепциялары проекттары эшләнде. Ғалимдарыбыҙ тарафынан шулай уҡ күреү ағзалары сирҙәрен дауалау технологияһын камиллаштырыусы һәм ультрафиолет нурҙар ҡеүәтен контролдә тотоусы "УФ-тестер"приборының тәжрибә өлгәһе эшләп сығарылды. Ҡатламдарҙың нефть биреү үҙенсәлеген көтәреүсе технологиялар индерелде, Республика перинаталь үҙәгендә нәҫелдән биреләүсе 10 төрлө ауырыуҙы алдан билдәләй алыусы ДНК-диагностикалау эшкә ҡушылды. БылаРҙан тыш, тағы ла етештереү өлкәләрендә, тирә-яҡ мөхитте һаҡлауҙа ҡулланылыусы бик күп яңы технологиялар һәм фәнни асыштар тураһында сәғәттәр буйына һөйләргә булыр ине.

Бөгөн Башҡортостан Фәндәр академияһының өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе - фәнни-инновацион эшмәкәрлек. Уның үҙ йүнәлештәре барлыҡҡа килде: беҙҙең ғалимдар үҙ ҡаҙаныштарын инновацион йәрминкәләргә сығара, федераль кимәлдәге семинарҙарҙа һәм конкурстарҙа ҡатнаша. Республикабыҙҙың ғилми үҙәге Башҡортостандың фәнни киләсәген дә онотмай, йәш ғалимдар - лайыҡлы алмаш әҙерләү бурысына етди ҡарай. Һәләтле балалар менән "Академик лицей", балалар һәм үҫмерҙәр өсөн робот техникаһы студияһы эшләй. Былтыр Өфөлә беренсе тапҡыр 5 меңдән ашыу кеше ҡатнашлығында Фән фестивале булып үтте.

Үҙемдең ғилми эшмәкәрлеккә ҡағылышлы шуны ғына әйтер инем: синтетик органик химия, металл-комплекслы катализ йүнәлешендә эшләйем, 128 патент авторҙашымын, 360 фәнни хеҙмәтем донъя күрҙе, Рәсәй юғары уҡыу йорттары студенттары өсөн тәғәйенләнгән 14 уҡыу әсбабым нәшер ителде. Шул уҡ ваҡытта 20 фән кандидаты, 2 фән докторының ғилми эштәре етәксеһе булдым.

***Ваҡифа ХӘЙРУЛЛИНА, философия фәндәре докторы, иҡтисад фәндәре кандидаты, БДУ-ның менеджмент һәм маркетинг кафедраһы профессоры, БР мәғариф отличнигы:*** Фән фән өсөн генә йәшәмәй, уның тикшереүҙәре, һығымталары, дөйөмләштереүҙәре йәмғиәтебеҙ, дөйөм кешелек өсөн хеҙмәт итә. XXI быуат башланып торған бөгөнгө көндәр фәнни асыштарға ифрат бай һәм был айырыуса ижтимағи фәндәр өлкәһендә - философия, социология, психология, менеджмент һ.б. өлкәләрҙә барған йәнлелек менән дә иғтибарҙы йәлеп итә. Ижтимағи аңдың үҫеше һәр кешенең донъяға ҡарашын билдәләүҙә, уны таныпбелеүҙә нигеҙ ташы булып ятырға тейеш. Дәүләт, йәмғиәт һәр шәхес өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш булған кеүек, һәр граждан, шәхес тә үҙ иле, үҙ дәүләте өсөн шәхси яуаплылыҡ тойоһонда тәрбиәләнергә тейеш. Был инде күп тапҡырҙар ҡабатланған хәҡиҡәт, ләкин фән һәр граждандың юғары аңлы гармониялы шәхес булып үҫеүенә булышлыҡ итергә бурыслы, тип уйлайым. Бер кем дә шәхес булып тыумай, ә үҙенә һалынған гендар, белем алыу, тәрбиә һөҙөмтәһендә кеше була. Ә бына шәхес булыр өсөн кешенең ижадҡа, мәҙәниләккә һәм хеҙмәткә һәләте хәл иткес роль уйнай. Бөгөнгө көндә бигерәк тә, сөнки айырым кешеләр аңында ҡиммәттәр алышынған мәл. Ысын ҡиммәттәрҙең ижад һәм хеҙмәт аша ғына билереүен йәш быуынға еткереү, йәғни шәхес тәрбиәләү ғаилә менән мәғариф системаһының ғына түгел, ә фәндең дә төп бурысы.

Фән өлкәһендә фиҙаҡәр хеҙмәт өлгөләре күрһәтеүсе коллегаларым - Башҡортостан ғалимдарын Рәсәй фәне көнө менән ҡотлайым, яңынан-яңы асыштар теләйем!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзитебеҙгә яҙылып, беҙҙең менән дуҫлыҡты дауам итеүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Был ярты йыллыҡта ла һеҙгә таныһығыҙҙы, ихтыяжығыҙҙы ҡандырыр, сәмләндерер, гәмләндерер, рухландырыр мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән ниәттәбеҙ.**

Һеҙгә шундай мәғлүмәт тә еткерәбеҙ: **1 февралдән 31 мартҡа тиклем тәүге ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән, йәғни 384 һум 36 тингә, 50665 индексы "Киске Өфө"гә 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙыла башлай алаһығыҙ.**

Ә инде эргә-тирәгеҙҙә "Киске Өфө"гә яҙылыусы ойоткан, өлгөрмәгән кешеләр булһа, уларға ошо һүҙҙәребеҙҙе тапшырығыҙ: гәзитебеҙгә 17 февралгә тиклем яҙылғандар уны марттан алдыра башлаясаҡ.

**Почтальондар иғтибарына еткерер һүҙҙәребеҙ ҙә бар.** 2014 йылдың беренсе яртыһына гәзитебеҙгә яҙылыу барған мәлдә уларға, кем дә кем иң күп (35 дананан башлап) "Киске Өфө"гә яҙҙыра, улар беҙҙең матур бүләктәргә лайыҡ буласаҡ, тигән хәбәребеҙҙе еткергәйнек. Бүләктәрҙе алыу өсөн почтальондың үҙе яҙҙырған квитанцияларҙың күсермәләрен редакцияға ебәреүе шарт.

**Тағы бер мәсьәлә:** яңы йылдың тәүге айында, ғинуарҙа, беҙҙең хөрмәтле дуҫтарыбыҙ - почта хеҙмәте гәйебе менән ҡайһы бер уҡыусыларыбыҙға баҫмабыҙ барып етмәне. Быны беҙ күп һанлы телефон шылтыратыуҙары аша беләбеҙ, хәлде асыҡларға, төҙәтергә, шылтыратыусыларға ярҙам итергә тырышабыҙ. Ләкин өйөнә гәзит килтермәһәләр ҙә, сабыр ғына көтөп ултырыусылар ҙа барҙыр, улар ҙа почта бүлексәләренә йә редакциябыҙға мөрәжәғәт итһен ине.

**Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: "Киске Өфө" гәзитенә республиканың һәр районында, ҡалаһында, ауылында яҙылып була.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөләге 2015 йылда Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары - дәүләттәр башлыҡтары Советы ултырышы һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуын үткәргән ваҡытта йәлеп ителәсәк объекттарҙың реконструкциялау һәм төҙөләш барышын тикшерҙе. Ағиҙел йылғаһы буйында урынлашҡан "КЕСКО-Хилтон" ҡунаҡхана комплексы, М. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейының яңы корпусы төҙөләштәре барышын, капиталь реконструкциялау барған Конгресс-холлы, Башҡорт опера һәм балет театрын, "Нефтселәр" Мәҙәниәт һарайын ҡараны, "Ҡунаҡһарай" сауҙа үҙәге эргәһендәге "Холидей Инн" ҡунаҡханаһы төҙөлөшө майҙансығында булды.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы ҡарамағындағы Законлар сығарыусылар Советы Президиумы ултырышында ҡатнашты. Унда илдәге мәҙәни сәйәсәттең өҫтөнлөклө йүнәлештәре билдәләнде, мәҙәниәт тураһында ҡануниәтте артабан үҫтереү перспективалары һәм "Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының мәҙәни мираҫы объекттары (тарих һәм мәҙәниәт ҡомартҡылары) тураһында" Федераль законға өҫтәмәләр тикшерелде. Төбәк вәкилдәре фекеренсә, "Мәҙәниәт тураһында"ғы Федераль законды ҡабул итеүҙе тиҙләтергә, бәләкәй ҡалаларҙа һәм ауыл ерендә мәҙәниәтте һаҡлау һәм үҫтереүгә законлар менән ярҙам итергә, матди булмаған мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡларға кәрәк.

✓Өфө ҡала Мәҙәниәт һарайында Мәҙәниәт йылын асыу тантанаһы уҙҙы. Сарала Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ирек Ялалов, мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһе хеҙмәткәрҙәре, ветерандары ҡатнашты. "2014 йыл мәҙәни өлкәне тамырынан яҡшыртыуға йүнәлтелгән аныҡ саралар йылы булырға тейеш, - тип билдәләне Әминә Ивнәй ҡыҙы. - "Донъяны матурыраҡ итәйек" тигән саҡырыуҙы Мәҙәниәт йылының лозунгыһы тип иғлан иттек. Ә кешеләрҙе матурлыҡҡа ылыҡтырыу өсөн уларҙы мәҙәниәт өлгөләре менән илһамландырыу кәрәк..."

БЫЛ АЙҘА...

**Бала саҡтан, Яңы йыл Ҡарһылыуын эйәрткән Ҡыш бабай һынында килә, тип үҫтек. Үҫә төшөп, был образдарҙың башҡа мәҙәниәттән, башҡа халыҡтан күсермә генә икәнен аңлағас, шундай һорау тыуҙы: үҙебеҙсә Яңы йыл образы юҡмы, булмағанмы? Тора-бара ундай образ һынланды: башҡортса Селлә бабай була икән дә теге Ҡыш бабай тигәне! Боронғолар әйтеүенсә, төньяҡтан тиреҫ еле иҫкән селлә миҙгеле декабрҙың аҙағында иң ҡыҫҡа көн менән иң оҙон төндә башлана ла, 40-45 тәүлек дауам итә. Йәйге селлә иһә, июнь аҙағында, киреһенсә, иң оҙон көн менән иң ҡыҫҡа төндә башлана, август башында тамамлана. Хәҙер иһә, ҡышҡы селләне Миләди календарь буйынса 1 йә 7 ғинуарҙа башлана тип иҫәпләүселәр ҙә бар. Бындай буталсыҡты иҫке иҫәп буйынса килеп сыҡҡан хәл тип тә аңларға булалыр.**

# СЕЛЛӘ БАБАЙ АУЫЛЫНДА ТЫУЫУСЫЛАР...

## кешелекте, милләтте алға әйҙәүселәр

Нисек кенә булмаһын, эш бында селләнең ҡасан башланыуында түгел, ә селләлек асылында. Тәбиғәттә бер нәмә лә артыҡ түгел: барыһы ла үҙ урынында. Элек өләсәйҙәр, әсәйҙәр селлә ваҡытында йыуған керҙәрен тышҡа сығарып туңдыра торғайны. Баҡтиһәң, барлыҡ вирус-бактерия-микробтар ошо рәүешле юҡҡа сыға икән. Тәбиғәт тә ошо рәүешле Селлә бабайҙың саҫҡау "миндеге" менән таҙарыныу үтә икән. Ғалимдар һуңғы йылдарҙа беҙҙәге агастарҙың, бигерәк тә ҡайындарҙың ниндәйҙер сиргә дусар булыуы хаҡында белдерә. Дөрөҫөрәге, уларҙы күҙгә күренмәгән ҡоротҡостар ашай. Сөнки һуңғы йылдарҙа селләләр ҙә селләләргә оҡшамай башланы. Бер көн 40 градус һыуыҡ булып тундырһа, иртәгәһенә 2-5 градус йылы булып, шаҡырайып ҡатҡан донъя ҡапыл килгән йылылыҡтан һиҫкәнә, оло тетрәнеү кисерә...

Хәйер, селлә айында, заманса итеп әйткәндә, "Ылаҡ" (26 декабрҙән һуң), "Һыуғояр" йондоҙлоғо аҫтында тыуыусы шәхестәр тураһында бер кәлимә һүҙ әйтеү өсөн башлағайным был хәбәремде. Уларҙың донъя кимәлендә танылғандарының бер нисәүһен атап китәйек: Ғайса бәйғәмбәр (Иисус Христос), Нострадамус, Ньютон, Сергей Капица, Жанна Д Арк, Алексей Толстой, Джек Лондон, Мөхәммәт Али, Мел Гибсон, Ванга, Моцарт, Галилео Галилей, Николай Коперник, Авраам Линкольн, Льюис Кэррол, Фрэнсис Бэкон, Павел Флоренский, Антон Чехов, Дмитрий Менделеев, Салтыков-Щедрин, Пастернак, Стендаль, Шаляпин, Владимир Высоцкий, Анна Герман, Иван Крылов, Вячеслав Тихонов, Борис Ельцин һ.б. Был шәхестәрҙең тарихта ҡалдырған эштәрен дә, холоҡ-фиғелен дә бер аҙ сырамытабыҙ. Хәҙер иһә улар исемлегенә үҙебеҙҙең мөхиттәге ҡайһы бер шәхестәрҙе лә өҫтәйек.

Барыһын да бергә күҙҙән үткәрһәң, дөйөм ҡылыҡһырлама ошолай: селлә айында тыуыусыларға оло фиҙакәрлек хас. Улар нисек кенә үҙҙәре өсөн генә йәшәргә тырышмаһын, үҙ асылдарын үҙгәртә алмай, дөйөм кешелек, ил, милләт яҙмышы өсөн борсолоп йәшәй. Быны ла әлеге лә баяғы селлә асылы менән аңлатып булалыр. Селлә айында тыуыусыларға принципиаллек тә, ҡатылыҡ та, бер аҙ уҫаллыҡ та тәҫ. Иң ҡаты һалҡында тыуып, тәүге һулышын алыусылар башҡаса була алмайҙыр ҙа инде...



Ҡатылыҡ, тигәндән. Академик Ғайса Хөсәйеновтың китабында Ырымбур өлкәһенең Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫеүсе Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев селләгә бәйле ҡыҙыҡлы бер йола хаҡында бәйән итә: "Беҙҙә бик үҙенсәлекле йола бар ине: ҡышҡы селләлә көндәрҙе ауыл осондағы өйҙән иҫәпләй башлайҙар. Был көн фәләндеке, иртәгә тегенеке һ.б. Шулай селлә бөткәнсе, көндөң нисек килеүенә ҡарап, кешегә характеристика бирәләр: йәки ҡаты, йәки йомшаҡ һ.б. тип. Шуға һәр өй үҙенең етер көнөн хафаланып көтөп тора: нисегерәк килер, артыҡ һыуыҡ булып, рисуай итмәҫме?.."

Беҙ ҙә ошо ауыл миҫалында селлә айын шартлы рәүештә "Селлә бабай ауылы", ә селләнең һәр көнөн бер шәхестең өйө тип атап, ауыл урамы буйлап атлап ҡарайыҡ. Был ауылдың өйҙәр һаны ҡырҡ ҡына түгел. Улар йөҙҙәрсә, меңдәрсә. Шуға күрә лә юбилей байрамдарын, хәтер һәм ҡәҙер кисәләрен үткәреүсе бер нисә йортҡа ғына иғтибар итәйек.

Быуа Ғинуар урамының 6-сы һанлы йорто. Унда күренекле композитор, Рәсәйҙең халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөсәйен Әхмәтовтың тыуыуына 100 йыллыҡты байрам итәләр. Унда халҡыбыҙ йырҙары ла, опералар ҙа берҙәй үк яңғыраша. 8-се һанлы йортта Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Юлай Ғәйнетдинов йәшәй. Ул үҙенең 60 йәшлек юбилейын оҙон көй башҡарыусылар, ҡурайсылар бәйгеһе итеп үткәрә, бер юлы ике ҡуанды ата. 9-сы йортта яҙыусы, шағир, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Баязит Бикбайҙың, 10-сы йортта этнолог, тарихсы, тарих фәндәре докторы Раил Кузеевтың, 15-се йортта актер, режиссер, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Әмир Абдразаковтың, 25-еlә Башҡортостандың халыҡ артисы Зәки Мәхмүтовтың, 31-се йортта Башҡортостандың халыҡ артисы Зәкиә Арыҫлановаһың хәтер һәм ҡәҙер кисәләре үтә.

Ауылдың Февраль урамы буйлап атлайыҡ. 1-се һанлы йортта медицина фәндәре докторы, Рәсәйҙең, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, БР Офтальмологтары ассоциацияһы президенты Марат Аҙнабаев үҙенең 75 йәшлек юбилейын уҙғара. Бәй, 1-се һанлы өйҙәр икәү икән. Икенсеһендә билдәле шағир, яҙыусы Муса Сиражи ҙа 75-ен билдәләй. 9-сы һәм 12-се һанлы йорттарға балалар йыйылған, улар Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Рәшит Ниғмәти менән Рәми Ғарипов шиғырҙары буйынса флешмоб ойошторған. 14-се йортта Советтар Союзы Геройы Таһир Күсимовтың тыуыуына 105 йыл тулыу айҡанлы хәтер кисәһе бара.

Февраль урамының 7-се һанлы йортонда иһә... Олимпия уйындары башланып тора, тиһегеҙме? Юҡ, унда Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты, Рәсәйҙең атҡаҙанған рационализаторы, Башҡортостандың атҡаҙанған нефтсеһе Мортаза Рәхимовтың 80 йәшлек юбилейы бара. Дөрөҫ, тап ошо мәлдә Сочи ҡалаһында сираттағы XXII ҡышҡы Олимпия уйындары ла асылды. Олимпияны асыуҙы Мортаза Ғөбәйҙулла улының юбилейына тап килтереү махсус уйланмағандыр, әлбиттә. Әммә Рәсәй Президенты Владимир Путиндың был шәхесте баһалап әйткән һүҙҙәрен ишетә торабыҙ, йәғни ул үҙенең сығыштарында республикабыҙҙағы һуңғы егерме йылда өлгәшелгән уңыштарҙың тап Мортаза Рәхимов исеме менән бәйләнгән икәнен билдәлә килә. Аксиомаға әүерелгән был хәҡиҡәтте раҫлап, республикабыҙ менән Мортаза Ғөбәйҙулла улы етәкселек иткән йылдарҙағы эштәрҙе һанап сығыу артыҡ булыр. Әммә шуныһы раҫ: тап шул йылдарҙа Башҡортостаныбыҙҙа быуаттар һуҙымында башҡарылмаған эштәр атҡарылды, юлдар һалынды, мәктәптәр, мәҙәниәт һарайҙары, театрҙар, дауаханалар, санаторийҙар төҙөлдө, республикабыҙ халҡы һынылыш йылдарын мөмкин тиклем аҙыраҡ тетрәнеү менән үтә алды. Күп кенә сәйәсмәндәр "Киләсәктә Рәсәй нисек булырға тейеш?" тип телеэкрандар аша "сүбәк сәйнәгәндә", Мортаза Рәхимов киләсәктәге Рәсәйҙең идеаль модулен Башҡортостан миҫалында төҙөп тә ҡуйҙы. Һәр хәлдә, прогрессив ҡарашлы сәйәсмәндәр беҙҙең республиканы тап шулай итеп күрә. Владимир Путин иһә, Башҡортостанды "бер тамсыла сағылған Рәсәйгә" тиңләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тыуған көндө билдәләү беҙҙең халыҡта элек булмаған. Был сара диндә лә ҡаралмаған. Шулай ҙа "Селлә бабай" ауылының Февраль урамындағы 7-се йортта йәшәүсе республикабыҙҙың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовты донъяға биргән селлә айында, селлә ауыҙҙы өтөп барһа ла, өнһөҙ ҡалып булмай. Ҡотлайбыҙ, ырыҫлы, уңышлы көндәр, оҙон ғүмер теләйбеҙ Һеҙгә, хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһына конкурста ҡатнашырға алты кандидатҡа рөхсәт бирелде. 3 февралдә үткән конкурс комиссияһы ултырышында дүрт кандидатура ҡире ҡағылған, улар: Николай Бажин, Вячеслав Гаврилов, Ринат Нәсибуллин һәм Илшат Шәфиғуллин. Һөҙөмтәлә документ тапшырған ун кешенең алтауһына конкурста ҡатнашырға рөхсәт ителде. Уларҙың исемлеге: Рафиҡ Дусалиев, Сәид Закиров, Николай Пучнин, Владимир Чернов, Марат Йосопов, Ирек Ялалов. Конкурс 12 февралдә үтә.

✓"Вечерняя Уфа" гәзитенә 45 йәш тулды. Оҙаҡ йылдар "Вечерняя Уфа" берҙән-бер ҡала гәзите була. Һуңынан "Уфимская неделя" аҙналығы, башҡорт телендә "Киске Өфө" гәзите ойошторола, "Уфимские ведомости" гәзетелә һәм "Уфа" ҡала журналы булдырыла. "Вечерняя Уфа" ҡала киң мәғлүмәт сараларының хоҡуҡлы нигеҙ һалыусыһы булып һанала. Бөгөн гәзиттең дөйөм тиражы 28 мең тирәһе дана иҫәпләнә. "Вечерняя Уфа"ның юбилейы менән гәзит хеҙмәткәрҙәрен Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Ирек Ялалов ҡотланы.

✓Сочиҙа Олимпия уйындарын асыу алдынан Силәбенең Башҡорт йәштәре иттифаҡы "Ауылпиада-2014" ҡышҡы уйындарын үткәрҙе. Быға оҡшаш ярыштар Силәбелә беренсе тапҡыр ғына уҙғарылмай. "Был беҙҙең өсөн Силәбе вуздарында уҡыусы башҡорт студенттары менән Силәбе өлкәһе һәм Башҡортостандан килеп эшләүсе башҡорт йәштәрен туплау һәм уларҙы бербереһе менән таныштырыу мөмкинлеге лә. Сара иҫерткес эсемлектәрһеҙ форматта үтә. Беҙ айыҡ, позитив эшмәкәрлек принциптарына таянабыҙ", - тип хәбәр итте БР-ҙың Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге матбуғат сәркәтибе Михаил Хәбиров.

✓Назар Нәжми ижадына арналған альбом авторҙары Ҡәҙим Аралбай һәм Ирек Кинйәбулатов Назар Нәжми исемендәге әҙәби премияға лайыҡ булды. Башҡортостандың халыҡ шағирының тыуған көнөнә арналған сара уның бәләкәй ватанында Дүртөйлә районында үтте. Әҙипте иҫкә алырға Өфөнән яҙыусылар, артистар, журналистар төркөмө килде. Йола буйынса улар шағирҙың һәйкәленә сәскәләр һалды, уның шиғырҙарын уҡыны һәм хәтирәләр менән уртаҡлашты.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# МИЛЛИ КӨРӘШТЕ ЛӘ...

## олимпия уйындарында күрергә яҙһын!

**Сочиҙа үткән XXII ҡышҡы Олимпия уйындары айҡанлы башҡорт спортсыларының фекерҙәрен ишеттереүҙе дауам итәбеҙ.**



**Тимур КӘРИМОВ: ушу саньда һәм ушу-таолу буйынса донъя чемпионы:** Америкала булғанымда, ундағы спортсылар менән аралашып, АҠШ-та спортҡа ни тиклем ҙур иғтибар бүленеүенә аптырағайным. Хәҙер Рәсәйҙә лә ыңғай үҙгәрештәр һиҙелә - шул мине нык һөйөндөрә. Ошо Олимпиада үтмәһә, шул уҡ Сочиҙа бындай үҙгәрештәр булыр инеме икән? Әйтеүе ҡыйын.

Һүҙем тағы бына нимә тураһында: беҙгә ошо мөмкинлекте файҙаланып, Олимпия уйындары исемлегенә үҙ спорт төрҙәребеҙҙе индереп ҡалырға тырышырға кәрәк. Әйтәйек, ушу спорты был исемлеккә инмәгән булһа ла, Пекинда үткән олимпия уйындары ваҡытында уйындар менән параллель рәүештә ҡытайҙар ушу буйынса донъя турниры үткәреүгә өлгәшкәйне. Әйткәндәй, был ярышта беҙҙең спортсылар ҙа еңеү яулағайны.

Ушуны был исемлеккә индереү мәсьәләһе тәүге тапҡыр 1998 йылда күтәрелгәйне. Шул ваҡыттан бирле был турала һөйләшеүҙәр дауам итә. Беҙгә лә башҡорт милли көрәшен олимпия уйындары исемлегенә индереү өсөн тырышырға кәрәк. Белеүемсә, бының буйынса ниндәйҙер эштәр эшләнә, уны унышҡа өлгәшкәнгә тиклем ныҡышмалы дауам итеү фарыз. Ундай мәсьәләләр менән тап ошо мәлдә - абруйлы ҡунаҡтарҙың Рәсәйгә килгән мәлендә ныҡлап шөғөлләнеп ҡалырға ла була.

Ә Сочиҙағы Олимпия уйындарына килгәндә, мин биатлон, хоккей, саңғы, фристайл, сноуборд ярыштарын ҡараясаҡмын. Һуңғы ике төрҙә акробатик элементтар ҡыҙыҡһындыра. Уларҙа ушу-таолу менән оҡшашлыҡ һиҙелә.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# УЛАР ОЛИМПИАДАЛА ҠАТНАША

## ...үҙебеҙҙең телевидение

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһының 30 хеҙмәткәре Сочиға XXII ҡышҡы Олимпия уйындарын яҡтыртырға китте.**

Уйындарҙа эшләү хоҡуғы алған был ижади команда Мәскәүҙә һәм сит илдә спорт, ижтимағи-сәйәси һәм мәҙәни сараларҙы трансляциялауҙа ҙур тәжрибәгә эйә. 2011-2013 йылдар дауамында яңы телевидение ҡорамалында эшләү оҫталығын үҙләштергән был хеҙмәткәрҙәр Рәсәй конкурсы нигеҙендә һайлап алыу турын, һуңынан тест ярыштарында уңышлы стажировка үткән, йәғни биатлон һәм саңғы ярыштары буйынса Донъя кубогында эшләгән. Улар хоккейҙы трансляциялау буйынса илдә иң яҡшыһы иҫәпләнә, Ҡаҙанда Универсиада-2013-тә лә уларҙың эше маҡтауға лайыҡ булды.

## ...башҡорт балы

**Башҡортостан апитерапия һәм умартасылыҡ буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге республиканың бренд тауарын Сочиҙа үтәсәк Олимпия уйындарына алып китте.**

"Олимпия" балы 150 грамдан алып дүрт килограмға тиклем пластик, быяла һәм ағас һауыттарға тултырылған. Бөтә донъя масштабындағы ярыштарҙың ҡунаҡтарына һәм ҡатнашыусыларға бөтәһе 150 төр тирәһе продукция тәҡдим ителәсәк.

- Беҙҙең балдың 60 процент самаһы сувенир һауыттарға тултырылған. Күргәҙмәгә килеүселәр беҙҙең республика тураһында күберәк белһен өсөн беҙ махсус мәғлүмәт стендтары, шулай уҡ рус, инглиз һәм немец телдәрендә "Башҡортостан - Рәсәйҙең балды төбәге" исемле буклет әҙерләнек, - тип хәбәр итте "Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге" дәүләт бюджет учреждениеһы етәксеһе Әмир Ишемғолов.

Башҡортостан ҡортсолары Имеретин уйһыулығының "Бәрхәт миҙгелдәре" комплексы территорияһында 1 февралдән алып 16 мартҡа тиклем үтәсәк "Рәсәй ынйыһы" махсус күргәҙмә-йәрминкәлә лә ҡатнаша.

Илдең 17 төбәге, шул иҫәптән Башҡортостан да бында үҙенең бренд продукцияһын тәҡдим итә. Маҡсат - сит ил ҡунаҡтарына Рәсәйҙе уның барлыҡ төрлөлөгөндә күрһәтеү. Алдан ҡуҙаллауҙар буйынса, Имеретин уйһыулығындағы күргәҙмә-йәрминкәгә, урындағы халыҡты иҫәпкә алмағанда, Олимпиаданың 100 мең самаһы ҡатнашыусыһы һәм ҡунағы киләсәк.

## ...Максим Чудов

**Сочиҙа өс Олимпия ауылы асылды, уларҙа уйындарҙа ҡатнашасаҡ спортсылар һәм рәсми кешеләр урынлашасаҡ. Өҫтәмә "Слобода" ауылының мэры итеп яныраҡ профессиональ спортсы карьераһын тамамлаған Өфө егете, биатлонсы Максим Чудов тәғәйенләнде.**

Саңғы уҙышы һәм биатлон буйынса ярыштар уҙған комплексҡа яҡын (500-800 метр) урынлашҡан "Слобода" олимпия ауылында шул ярышта ҡатнашыусы спортсыларҙы, шулай уҡ делегация ағзаларын урынлаштырыу тәьмин ителгән. Үҙенең матурлығы буйынса үҙенсәлекле тау ландшафтында урынлашҡан "Слобода" ауылы рус халыҡ әкиәттәре рухында төҙөлгән. Ҡунаҡтарҙы бөтәһенә лә билдәле әкиәт персонаждары: Мәскәй әбей, Ут-ҡош (Жар-птица), Илья Муромец, Садко, Иванушка-дурачок һәм Һоро Бүре һындары ҡаршылай.

## ..."Кружева" ансамбле

**М. Акмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының "Кружева" ансамбле 9 февралдә Красная Поляналa урынлашҡан Олимпия ауылдарының береһендә концерт ҡуясаҡ.**

Ансамбль етәксеһе, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Ольга Андреева әйтеүенсә, былтыр йәй Сочиҙағы Уйындарҙың рәсми сайтында улар илдең ижади коллективтары араһында конкурс тураһында мәғлүмәт күреп ҡала. Үҙҙәренең сығыштары төшөрөлгән видеоны ебәрәләр һәм йомғаҡтар буйынса иң күп тауыш йыялар.

- Ойоштороусылар беҙҙең менән бәйләнешкә инде һәм Сочиға саҡырҙы, - тип һөйләй Ольга Андреева. - 30 минутлыҡ концерт программаһы менән сығыш яһаясаҡбыҙ, уны коллективыбыҙҙың визит карточкаһы булған "Шкатулка" урыҫ бейеүе асып ебәрә. Өс урыҫ бейеүенән башҡа, ҡыҙҙар һәм егеттәр башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ бейеүҙәрен башҡарасаҡ.

"Кружева" ансамбленең бейеүселәре Сочиҙа бөтәһе өс майҙансыҡта сығыш яһаясаҡ.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БҮЛӘГЕН ҺАТЫП АЛАСАҠ!

**Дәүләт хеҙмәткәрҙәренә бүләк ителгән әйберҙәр һатыуға ҡуйыласаҡ. Коррупция менән көрәш маҡсатында премьер Д.Медведев дәүләт хеҙмәткәрҙәренә бүләктәрҙе контролгә алыуҙы ҡәтғиләштерҙе.**

Хәҙер чиновниктар 3 көн эсендә алынған бүләктәре хаҡында хәбәр итеп, уны экспертизаға тапшырырға тейеш - уның хаҡы 3 меңдән артмаһа, бүләк уға кире ҡайтарыла, ә инде 3 меңдән ҡимміәтерәк булған ҡиммәтерәк булған ҡиммәттерәк булған бүләкте чиновник уны ике ай эсендә һатып ала, теләмәһә, бүләк һатыуға ҡуйыла һәм аҡсаһы ҡаҙнаға күсерелә.Бүләк алыуҙары хаҡында хәбәр итеү бурысы Хөкүмәт ағзаларына, губернаторҙарға, мэрҙарға, урындағы хакимиәт ағзаларына, депутаттарға, судьяларға, бөтөн дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәренә, Үҙәк Банк, Пенсия фонды, Мотлаҡ медицина страховкаһы федераль фонды, дәүләт корпорациялары, шулай уҡ дәүләт ғилми һәм уҡыу йорттары хеҙмәткәрҙәренә ҡағыла.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔"Сыңғыҙхан" ижади төркөм ҡатнашыусыларының "Донъяларҙы киңәйтеп" күргәҙмәһе Өфөнөң "Мираҫ" художество галереяһында асылды. Күргәҙмәне беренсе ҡараусылар араһында республика Президенты Рөстәм Хәмитов та булды, ул экспозицияларҙы ҡараны һәм авторҙар менән аралашты. "Донъяларҙы киңәйтеп" күргәҙмәһе 15 мартҡа тиклем эшләйәсәк.

✔2014 йылдың 15 февралендә Совет ғәскәрҙәрен Афғанстандан сығарыуға 25 йыл тула. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, юбилей датаһын байрам итеү сиктәрендә ветерандар менән осрашыуҙар, тематик күргәҙмәләр, батырлыҡ дәрестәре, концерттар, спорт эстафеталары, класс сәғәттәре, лекциялар, һәләк булған һалдаттарға ҡуйылған һәйкәлдәр эргәһендә митингтар үткәреү планлаштырылған.

✔Башҡортостанда "Мой банк" Мәскәү кредит ойошмаһының бүлексәләре юҡ, уның лицензияһын 31 ғинуарҙа Рәсәй Банкы тартып алған. Республика территорияһында теркәлгән "Мой банк. Ипотека" үҙ аллы кредит ойошмаһы булып һанала, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһының Милли банкы. "Мой банк. Ипотека" вкладтарҙы страховкалау системаһы ҡатнашыусыһы булып тора, ул айырым кешеләргә һәм шәхси эшҡыуарҙарға 700 мең һум суммаға тиклем аҡсаларҙы тулы күләмдә ҡайтарыуға гарантия бирә.

✔Татарстанда йәшәүсе яҡташыбыҙ, крайҙы өйрәнеүсе Йәдкәр Бәшировтың "Урал һәм Волга буйы халыҡтары тарихына яңы ҡараш" тигән китабы баҫылып сыҡты. 12 февралдә сәғәт 3-тә Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала ошо китаптың презентацияһы була.

✔Башҡортостанда 2013 йылдағы социаль-иҡтисади үҫешкә йомғаҡтар яһала. 2013 йылдың 11 айында республикала уртаса эш хаҡы, номиналь сағылышта - 12 процентҡа, ысынбарлыҡта 5 процентҡа артып, 22 мең һум тәшкил итте. Уҡытыусыларҙың эш хаҡы ошо уҡ осорҙа уртаса республика кимәлен 3 процентҡа уҙып, 23 мең 600 һум тәшкил итте. Мәктәпкәсә белем биреү педагогтарының эш хаҡы белем биреүҙәге уртаса кимәлгә тиклем еткерелгән.

АФАРИН!

**Уҙған йыл аҙағында Санкт-Петербург ҡалаһында Бөтә Рәсәй мәғарифы форумында "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы мәктәбе", "2013 йыл директоры" тигән конкурстарға йомғаҡ яһалды. Конкурстың "Музыкаль мәктәптәр" номинацияһында Өфө ҡалаһының Әҙеһәм Иҫҡужин исемендәге 9-сы Балалар музыка мәктәбе еңеп сығып, мәктәп коллективына "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы мәктәбе" миҙалы, лауреат дипломы тапшырылды. Ә музыка мәктәбе директоры, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әхиәт Ғиниәт улы ҒӘЙЕТБАЕВ "2013 йыл директоры" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. 2012 йылда ул Рәсәйҙең "Мәғариф үҫешендәге хеҙмәте өсөн" миҙалы менән бүләкләнгәйне. Бынан тыш, мәктәптең республика, Рәсәй, донъя кимәлендә төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, лауреат исемдәре яулауы, төрлө номинацияларҙа уңышҡа өлгәшеүе хаҡында ла бик күп миҫалдар килтерергә булыр ине. Балалар музыка мәктәбенең һуңғы йылдарҙағы уңыш нигеҙе нимәгә бәйле һуң? Ошо һорауға яуапты мәктәп директоры Әхиәт ҒӘЙЕТБАЕВтың әңгәмәһендә табырһығыҙ.**



# ЗАТОН БИҪТӘҺЕНДӘ...

## бар бер мәктәп

### Ир маҡтана, ҡорал эшләй…

Мәктәбебеҙ ағас йортта урынлашҡан, заман талаптарына яуап бирерлек шарттар юҡ. Ә шулай ҙа уҡыу-уҡытыу процесын кәрәкле музыка ҡоралдары, әсбаптар менән тәьмин итергә тырышабыҙ. Былтыр Чехияла яһалған "Hoffman" рояле, тағы ла "Estonia" рояле һатып алғас, ошо музыка ҡоралы ярҙамында ике тапҡыр ҡала музыка мәктәптәренең фортепиано класы уҡыусылары конкурсын үткәрҙек. 1966 йылда асылған музыка мәктәбе тарихында ҡала кимәлендәге ошондай ҙур сара үткәреү тәүге тапҡыр. Саралар үтеүе булды, иғтибар үҙегенә лә әләктек. Был бик яҡшы, әлбиттә. Беренсенән, былдай саралар ойоштороп, беҙ үҙебеҙ күп нәмәгә өйрәнеп ҡалабыҙ, икенсенән, мәктәбебеҙҙең перспективаһы үҫә. Мәктәбебеҙгә килеүселәр һәр ваҡыт беҙҙәге ыңғай энергетиканы, ижади ауараны тойоуҙары хаҡында белдерә. Элек һәр кимәлдә лә 9-сы музыка мәктәбенең "иларлыҡ" хәле хаҡында йыш һөйләнелә торғайны. Ул хәлдә "ярым-емерек" тигән формала ишетә инек. Беҙ бөгөн мәктәбебеҙ хаҡындағы был стереотипты тулыһынса емерергә тырышабыҙ. Ете йыл буйына мәктәпкә бер туҡтамай ремонт яһаныҡ. Яңы музыка ҡоралдары һатып алыуға килгәндә, был осраҡта "Ир маҡтана, ҡорал эшләй" тиҙәр. Роялдән тыш "Ballone burini", "Юпитер" концерт баяндары, 3 фортепиано, синтезаторҙар, "Yamaha" концерт флейтаһы, француз гобойы, 7 башҡорт думбыраһы, 7 рус домраһы, 12 скрипка, 4 гитара һатып алдыҡ. Бынан тыш, ике музыка теорияһы класын тулыһынса компьютер менән йыһазландырҙыҡ, 116 комплект сәхнә кейеме тектерҙек. Барлыҡ был сығымдар 2,5 миллиондан ашыу сумманы тәшкил итте.

### Тәүге баҫҡыс

Һуңғы бер нисә йыл эсендә беҙ уҡыу-уҡытыу процесын системаға һалыуға өлгәштек. Сөнки күптәр музыка мәктәбенә дөйөм белеү мәктәптәрендәге түңәрәк эшенә ҡараған һымаҡ ҡарай. Беҙ был ҡараштың емерҙек. Тәүге педсоветта хатта "Нимә беҙгә сольфеджио?" тиеүселәр ҙә булды. Ә нотаны белмәйенсә тороп, ниндәй музыка мәктәбе хаҡында һүҙ алып барырға мөмкин һуң? Музыка мәктәбе хромка йә мандолина тотоп, туйҙарҙа кешеләрҙе бейетеүсе йә йырлатыусы музыканттар ғына әҙерләргә тейешме ни? Яңы федераль закондар буйынса беҙҙең музыка мәктәптәре профессионалдарҙы әҙерләүҙең тәүге баҫҡысын тәшкил итергә тейеш. Ғәҙелһеҙлек нимәлә килеп сыға? Дөйөм белем биреү мәктәптәрендәге бейеү, йырлау, һүрәт төшөрөү түңәрәктәре эше өҫтәмә белем биреү тип атала. Беҙҙең музыка мәктәптәрен шул түңәрәктәргә тигеҙләгәндәр ҙә инде. Беҙ хәҙер тәүге профессиональ әҙерлек баҫҡысы йүнәлешендәге уҡыу йортона күсеү буйынса документация әҙерләйбеҙ. Хәҙер беҙҙә скрипка класы ла эшләй. Бынан 5-6 йыл элек хор традициялары хаҡында хыяллана ғына инек. Шәрипова Светлана тигән уҡытыусыны эшкә алып, уға хор ойоштороу бурысын ҡуйҙым. Быйыл республика конкурсында беҙҙең хор 1-се урынды яуланы. Башҡорт музыка ҡоралдары оркестрын астыҡ. Параллель рәүештә рус халыҡ музыка ҡоралдары оркестры эшләп китте.

### Кадрҙар, кадрҙар, кадрҙар…

Уңыштарыбыҙҙың төп сәбәбе үҙ эшенең профессионалы булған уҡытыусыларыбыҙҙа. "Халыҡтар атаһы"ның ҡасандыр әйткән "Кадрҙар барыһын да хәл итә" тигән һүҙҙәре һәр заман өсөн ҡулай. Ҡайһы бер уҡытыусыларҙы ситтән саҡырырға тура килде. Әйтәйек, Шәһәрғәзиндар ғаиләһен Сибайҙан саҡырып алдым. Ғаилә башлығы Заһир Шәһәрғәзин флейта буйынса яҡшы белгес, оҫта ҡурайсы һәм музыканы оркестрға һалыусы. Ҡатыны Гөлсәсәк башҡорт думбыраһы буйынса яҡшы белгес. Улар хәҙер бик уңышлы ғына эшләп алып китәләр. Ленин районы хакимиәте ярҙамы менән уларҙың балаларын башҡорт балалар баҡсаһына урынлаштырҙыҡ. Заһир менән Гөлсәсәк беҙҙең мәктәптә ҡурай һәм думбыра кластарын асып, мөхитебеҙгә башҡорт моңон, башҡорт сәнғәтен алып килде. Уның ҡарауы, элек, асылда, классик музыка яңғыраған мәктәпкә яңы һулыш килеп ингәндәй булды. Мәктәбебеҙгә атаҡлы ҡурайсы, йырсы, педагог Әҙеһәм Иҫҡужин исеме бирелеүе беҙҙең ижади мөмкинлекте яңы баҫҡысҡа күтәрҙе. Беҙ былдай ижади мөхит булдырыуға дөйөм, коллектив тырышлыҡ менән өлгәштек.

Хәҙер беҙ ай һайын уҙған педсоветтарға бер-беребеҙҙең уңыштарына ҡыуанып, алдағы айға маҡсаттар билдәләр өсөн генә йыйылабыҙ. Беҙгә төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә уҡыусылар дәрестән һуң йөрөп уҡый. Мине шуныһы ҡыуандыра: балаларын беҙҙең мәктәпкә бирергә теләүселәр ифрат күп, әммә беҙ уларҙың барыһын да ҡабул итә алмайбыҙ. Сөнки мәктәбебеҙҙә нисек кенә һыҙырға тырышһаҡ та, ул 293 балаңы ғына һыйҙыра. Беҙҙә эшләүсе 35 уҡытыусының 25-е юғары белемле, 12-һе юғары, 14 уҡытыусы 1-се категориялы. Өс уҡытыусыбыҙ Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Беҙҙә атҡаҙанған артист та эшләй.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әлеге ваҡытта Әҙеһәм Иҫҡужин исемендәге 9-сы музыка музыка мәктәбенең яңы бинаһы төҙөлөп ята. Мәктәп янында айырым бинала концерт залы урынлашасаҡ. Директор унда хореография, театр бүлектәре асырға ниәтләй. Концерт залына театрҙарҙы, артистарҙы саҡырып, Затон биҫтәһе халҡына мәҙәни саралар ойоштороу перспективаһы ла асыла. Яңы уҡыу йылы башында асылырға иҫәп тотолған яңы музыка мәктәбендә әлеге 293 урынына 500-ләп бала музыка, сәнғәт, мәҙәниәт серҙәрен өйрәнәсәк. Мәҙәниәт йылында яңы музыка мәктәбе асылыуы баш ҡалабыҙ тормошоноң сағыу ваҡиғаһы булырына шиҡ юҡ.**

Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.

ДӘҮЛӘТ ХӘСТӘРЕ

# БЕР, ЛӘКИН БЕРӘГӘЙЛЕ

**Аҙ тәьмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләр быйыл дәүләттән ниндәй ярҙамға өмөт итә ала?**

**Аҙ тәьмин ителгән ғаиләләр** менән социаль контракттар төҙөү былтыр башланғайны. Етешһеҙ тормоштан арыныу өсөн былдай ғаиләләр хәҙер эшкә урынлашыуҙа, берәй һөнәргә эйә булыу маҡсатында уҡыуҙа, шәхси ярҙамсы хужалығын үҫтереүҙә дәүләттән ярҙамға өмөт итә ала. Дәүләт аҡсаһына хатта шәхси предприятие асырға ла мөмкин буласаҡ. Былдай маҡсатлы аҡса бер тапҡыр түләнә, һәм ғаиләләргә был сумманың нисек, ҡайҙа файҙаланылыуы хаҡында отчет бирергә тура киләсәк. РФ Хеҙмәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 2013 йылда төбәктәрҙә 17 мең социаль контракт төҙөлгән, бер тапҡыр түләнелгән аҡса күләме уртаса 30-50 мең һум тәшкил иткән.

**Күп балалылар өсөн.** 2013 йылдың 1 ғинуарынан 65 төбәктә күп балалы ғаиләләрҙә социаль яҡлауҙың яңы төрө – өсөнсө һәм унан һуңғы балалар өсөн аҡсалата айлыҡ түләүҙәр индерелгәйне. Уның күләме балаларҙың төбәк йәшәү минимумы кимәленән сығып билдәләнгән. Былтыр был сумма ил буйынса уртаса 7 меңгә тигеҙләнде. 2013 йылда 75 мең ғаиләгә шундай ярҙам күрһәтелгән. Күп балалы ғаиләләргә быйыл да ошондай ярҙам күрһәтеү дауам итәсәк.

**Балалар пособиеһы.** 2014 йылдың 1 ғинуарынан балалы ғаиләләргә бөтә төр пособиелар, шул иҫәптән, бала тыуғас, бер тапҡыр түләнә торған һәм 1,5 йәшкә тиклем баланы ҡарау буйынса пособиелар индексацияланды. Өҫтәмә 5 процентҡа тигеҙ. Бала тыуғас, хәҙер ғаиләгә 13,7 мең һум түләнәсәк. 1,5 йәшкә тиклемге баланы ҡараған һәм эшләмәй ултырған (мәҫәлән, студентка) әсәгә хәҙер 2,6 мең һум - тәүге балаһын ҡараған өсөн һәм 5,2 мең һум - икенсе һәм унан һуңғы балаларын ҡараған өсөн түләнәсәк.

**Йөклөлөк буйынса пособие.** 2014 йылда йөклөлөк һәм бала табыу буйынса түләнә торған пособиеның иң ҙур күләме айына 44,9 мең һум тәшкил итәсәк. Был пособие эшләүсе ҡатындарға бала табыр алдынан - 70 көнгә һәм бала тапҡас - 70 көнгә иҫәпләп түләнәсәк. Шуныһын да иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: пособие уртаса эш хаҡының 100 проценты күләмендә түләнә. 1,5 йәшкә тиклем бала ҡарау буйынса иң күп айлыҡ пособие уртаса эш хаҡының 40 проценты күләмендә билдәләнеп, 18 меңгә тиклем артты. Ә әсәлек капиталы индексацияланғандан һуң 429,4 мең һумғаса артты.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Авитаминоз

❖ 100-150 грамм ҡайын еләгенә 2 балғалаҡ бал, туралған 1 кивины ҡушырға һәм бөткәнсе ашарға.

### Цистит

❖ Бер нисә кирбесте йылытып биҙрәгә һалырға һәм өҫтән сепрәк менән ҡапларға. Биҙрәгә ятып, эстең түбәнге өлөшөн йылытырға. Был дауаны ауырыу баҫылғансы, көнөнә 3 мәртәбә эшләргә.

❖ Табала ҡыҙҙырылған һолоно сепрәк тоҡсайға һалып, ҡоро грелка урынына ҡулланырға була. Ауырыу мәлендә уны ҡорһаҡ аҫты өлөшөнә ҡуйып, йылытырға. Йылға ҡомон да файҙаланырға була.

### Имән ҡайырыһы

❖ Ҡайһы берҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшендә ҡаты төйөрҙәр барлыҡҡа килә. Шул ваҡытта 1 ҡалаҡ кипкән имән ҡайырыһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ҡайнатып сығарып, бер аҙ һыуынғас, тағы ҡайнатырға, урап, 3 сәғәт төнәтергә. Шул төнәтмәгә сепрәкте еүешләп, түштәрҙең тығыҙланып торған урындарының тирә-яғына компресс эшләргә, 2 сәғәттән алырға. Иртәле, кисле эшләү отошло.

### Тырнаҡтар

❖ Һыу менән күп булышҡанда тырнаҡ йомшара һәм тиҙ һына. Был бәләнән ҡотолоу өсөн ҡулды һәм тырнаҡтарҙы 10-15 грамм аш һеркәһе, 20 грамм глицерин, 40 грамм һыу ҡатнашмаһы менән ышҡырға, төнгөләккә тырнаҡтарға берәй төрлө май һөртөргә.

❖ Төрлө эш эшләгәндә тырнаҡ аҫтына бысраҡ-фәлән инмәһен тиһәң, уларҙы һабын менән ышҡырға ғына кәрәк.

### Ҡыҙыл сөгөлдөр

❖ Уның буяусы матдәләре капиллярҙарҙы нығыта, юғары ҡан баҫымын төшөрә, тамырҙар тарайыуын - склерозды булдырмай. Бешкән сөгөлдөр һәм уның һыуы ҡан составын нормалләштерә, аҙ ҡанлылыҡтан ҡотҡара.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

**✓ Баланың эске донъяһы менән таныш түгелбеҙ, уның холоҡ-фиғеле ҡайһы йүнәлештә үҫешкәнен күҙҙән ысҡындырып ебәрәбеҙ, хатта интернет аша аралашып та юлдан тайпылыуын һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ.**



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Боҙомдан им-том

Башҡорттар боҙомдоң яман ҡөҙрәтенә ышана һәм ҡурҡа. Улар әйтеүенсә, боҙом сихырсы ярҙамында берәй дошман тарафынан хаслыҡ өсөн эшләнә. Унда ендәр ҙә ҡатнаша. Сихырсыны ҡорбанына (мал-тыуарға, ғаилә башлығына, уның бала-сағаһына, бисәһенә) ендәр һөсләй.

Боҙомдо ҡайтарыу өсөн сихырлап йәшерелгән әйберҙе табыу кәрәк. Боҙомдо тапмайынса, өйгә тыныслыҡ ҡайтмай: йә мал-тыуар, йә эйәһе зыянлана.

Күптәр боҙомдан ауырый. Һиңә төпләп, һиңә арнап ебәрелгән насар энергиянан еңел генә һаҡланып була. Боҙомдо бер кем дә ауыҙға көсләп ҡаптырмай. Ләкин туй ваҡытында, башҡа мәжлестәрҙә был йәһәттән аҙыҡтың бер валсығын тәүҙә ситкә төшөрөргә кәрәк. Ана шул тәүге тамсы йәки валсыҡ менән боҙом да ситкә китә.

Боҙомдо көслө муллалар әпсен менән төҙәтә ала. Тик ҡырҡ төйөн төйнәп, һыуға һалһалар, бигерәк тә урыҫ сихырсыһы эшләһә, боҙомдо бөтөрөп булмай, тиҙәр.

"Эйәңде тап, эйәңде тап", тип әйтергә кәрәк икән боҙом һалынған әйбергә. Шунан ауырыу боҙом эшләгән кешенең үҙенә ҡайтып һуғыла икән.

## Эрәт сиренә (ваба, тапма) им-том

**Сөй ҡағыу.** Элек таш сөй ҡағыу йолаһы булған. Им-томсолар уны төрлө ауырыуҙарға ҡаршы ҡулланған. Кешеләр кинәт ауырып үлһә, һаташһа, янып-бешһә, өшөһә, тән тиреһе сыбарланһа, ҡарттар был тапма ауырыуы тип әйтә торғайны. Ошо ауырыу булһа, имсе кеше урманға барған һәм ағас төбөнән "ҡараташ" ҡаҙып алған. Уны алып ҡайтып ваҡлаған һәм шул ташҡа тоҙ ҡушып эсергән. Ул ҡараташ ағас төбөнән булырға тейеш, ти, ә ағасы йә ҡарағас, йә ҡарағай була (ҡайын төбөнән булһа, ул ташты "бәлә-ҡаза ташы" тиҙәр). Ул таш күсенеп йөрөй. Ул булған урында ағастар йыуан, ә япраҡтары күкһел-йәшел була, имеш. Әгәр кеше йүнәлһә, имсе әбей уның менән шул ергә барып, күлдәк, салбар йә оҙон ойоҡ алып, көсө, дауаһы китмәһен өсөн ағасҡа бәйләп-уратып ҡуйған. Әгәр инде кеше үлһә, шунда алып барып күмгәндәр. Шул ергә ташлы сөй эшләп, кейемен сисеп, ҡаҙап киткәндәр. Ҡаҙап киткәндә, теге әйберҙең ең-балағын төрнәгәндәр, улай эшләмәһәләр, имеш, еңенән "ен" ауырыуы, ә балаҡтан "һалаҡ" ауырыуы сығыр, тиҙәр.

Ул сөй ташы шул уҡ таштан эшләнгән булған. Борон тимерселәр тимер сыныҡһын өсөн уны күмер араһына һалғандар. Ул ташты тау башында көн оҙаҡ йонсоу булһа, еҫе Хоҙайға барып етһен өсөн, ҡаҙанға һалып ҡайнатҡандар. Ҡарттар әйтеүенсә, ул дауалы таш ҡараташ исемле тауҙарҙа күп була, иң һәйбәте Уралтау һәм Ағиҙел буйында. Әле лә шул бер ауырыу сыҡһа, ҡатай яҡтары ауылдарында ауырыуҙың кейемен урманға алып барып, ағасҡа быраҡтыралар. Ҡайһы берәүҙәр бөгөн дә бесән тапап йөрәмәһендәр йә еләген йыймаһындар тип, ерҙе ҡурҡыныс, "зарарлы урын" итеп күрһәтер өсөн, эске күлдәк бысратып элеп китәләр. Ҡайһылары яуыз уй менән ауырыу, бәлә-ҡаза юрап, эленгән керҙе урлап, шул ағасҡа тимер сөй, уҡ-һөңгө йә кәйлә осо менән ҡаҙап киткән. Билдәле булыуынса, зарар шул яуыз уйлы кешегә була, ти, сөнки тимер сөй - кеше ҡулы әйбере бит, ә сөйҙөң төйөнә һуғыу тауышы мейегә һеңеп, мейене "тут" ала икән.

**Йоҡоһоҙ интеккәнгә даға.** Баламы, оло кешеме оҙаҡ йоҡлай алмаһа, уның баш аҫтына яман заттар килмәһен тип, дағა һалғандар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

## Ун һигеҙенсе һабаҡ: "Бала һәм уйынсыҡ"

**Балалар уйынсыҡтары... Магазин кәштәләренә күҙ һалһаң, иҫ-аҡылың китерлек уйынсыҡтар бар хәҙер. Балаңды етәкләп инһәң, ул әле береһенә, әле икенсеһенә ынтыла. Барыһы ла матур, мауыҡтырғыс, ымһындырғыс. Уйынсыҡ етештереүселәр атай-әсәйҙәң баланы ныҡ яратыуын, күңелен ҡыйырға теләмәгәнен, уның өсөн ҡулынан килгәнен дә, килмәгәнен дә эшләргә тырышып-ынтылып торғанлығын белә, шуның өсөн уйынсыҡтарға хаҡты самаһыҙ ҡиммәт ҡуя. Бала хаҡты белмәй, ҡыҙыҡҡан уйынсығын алдыра. Урам буйлап аяғы ергә теймәй ҡыуанып ҡайта. Шунан уның менән күп тигәндә ике-өс көн уйнай һәм танһығы ҡана.**



Балаға уйынсыҡ алырға кәрәк. Ләкин ниндәйен? Әлбиттә, бала үҙ ҡулдары менән ниҙер яһап, теҙеп, үҙ хыялындағыса эшләп уйнарға ярата. Шуның өсөн ярым әҙер уйынсыҡтар алыу отошло. Ә ҡыҙ балаға бала ҡурсаҡтар алыу маҡсатҡа ярашлы була. Ғаилә, атай, әсәй, бала итеп сығарылған Барби, Кен уйынсыҡтары менән уйнаған ҡыҙ баланы күҙ алдына килтерәйек. Атай менән әсәй итеп яһалған ҡурсаҡтарҙы үҙ-ара нисек һөйләштерһен, кем итеп уйнатһын бала? Ҡыҙ бала нисә генә йәштә булһа ла ҡурсаҡтарҙы йә үҙенә тиң, йә үҙенән бәләкәй итеп уйнатырға ярата. Ул йә әсәй (әсәй булып йышыраҡ осрай), йә уҡытыусы, тәрбиәсе булып уйнай. Барби ҡурсаҡтарҙың бала аңына нисек тәьҫир итеүе тураһында уйлап та ҡарамай һатып алырға ынтылабыҙ. 1959 йылдан, бындай ҡурсаҡтар сығарыла башлағандан алып, барби ҡурсаҡтары хаҡында донъя кимәлендә бәхәстәр бара, ул бәхәстәр тынмаҫ та, туҡтамаҫ та. Америка кешеһе Рут үҙенең Барбара исемле ҡыҙының исемен, Кен исемле улының исемдәрен атап етештерә башлаған был ҡурсаҡтар киң таралды хәҙер. Уны етештереүҙе туҡтатмаҫ өсөн һәр ваҡыт заман талаптарынан сығып камиллаштырып торалар. Хәҙер иһә заман модаһы менән кейемдәр тегеп кейендерәләр. Матур һәм зауыҡлы итеп кейендерелгән был ҡурсаҡтар күҙ яуын алып тора, әлбиттә. Әммә ундай ҡурсаҡтарҙы фәҡәт баланы алдаштырыу, ваҡытын ниндәйҙер шөғөл менән тулыландырыу өсөн генә файҙаланырға мөмкиндер. Әлбиттә, баланы зауыҡлы кейенеү, мода айыра белеү яғынан ниҙер тәрбиәләй алалыр был ҡурсаҡтар. Ләкин бит ундай зауыҡ бала бәләкәй генә сағында һалынмай, үҫә килә тәрбиәләнә.

**Ә бала бәләкәй саҡта уға тышҡы түгел, ә күңел тәрбиәһе кәрәк. Күңел тәрбиәһен әҙер уйынсыҡтар түгел, ә баланың үҙ фантазияһын ҡушып бар иткән донъяһы ғына тәрбиәләй ала.**

Бала өсөн уйынсыҡ нимә ул? Уйынсыҡ - ул баланың хыял донъяһын сағылдырырлыҡ мөхит бар итеү сараһы. Бала үҙ уйыны менән эске донъяһын аса. Бәләкәй генә итеп биләп алған күңел майҙанында уның хыял донъяһы урынлаша. Бала башкөллө ошо донъяға сума. Һөйләшеүгә ауыр, теле һуң асылған балалар ҙа, бик аралашып бармаған йомоҡ балалар ҙа ошо үҙ донъяһында ҡәҙимгесә һөйләшә, үҙе уйлап сығарған яҡындары менән аралаша. Баланың эске донъяһын белгең килһә, һиҙҙермәй генә уның уйынына күҙ һал да, һөйләшеүенә ҡолаҡ һал.

Шуның өсөн уйынсыҡтарҙы ялтырауыҡтан, тотош әҙер эшләнгәндән түгел, ә ярым яһалғанды алырға кәрәк. Ә инде, һис юғы, йәйге ял осоронда балалар менән тәбиғәткә сығып, тәбиғәт донъяһы менән аралашып, ағастан, япраҡтарҙан, таштарҙан, балсыҡтан һәм башҡа шундай һығылмалы, әүәләп тә, йомарлап та һәр төрлө ҡалыпҡа йәтеш кенә, тиҙ генә килтермәле нәмәләрҙән бала менән бергәләп төрлө уйынсыҡтар яһап аралашыу бала менән аралашыуҙың иң матур ысулы ул. Бала менән бергәләп яһалған хыяли мөхит уның фантазияһын үҫтереп кенә түгел, ә эске донъяһын өйрәнеп алыу өсөн атай-әсәйгә артабанғы тәрбиә эшендә ныҡ ярҙам итер ине.

Әлбиттә, йәйге ялдарҙан башҡа ваҡытта көнө-төнө эштә юғалған һәм кисен генә ҡайтып бала менән аралашырға форсат тапҡан заман атай-әсәйҙәренән дә; бергә йәшәрлек шарттар булмағанлыҡтан, айырым донъя көтөп, ейән-ейәнсәрҙәре менән бик һирәк кенә аралашыу форсаты тейгән өләсәй-олатайҙарҙан да тәрбиә эшендә әүҙем ҡатнашып китеүҙәрен өмөт итеү мөмкин түгел. Шуның өсөн баланың эске донъяһы менән таныш түгелбеҙ, уның холоҡ-фиғеле ҡайһы йүнәлештә үҫешкәнен күҙҙән ысҡындырып ебәрәбеҙ, тәрбиә эшендә иң ҙур ярҙамсы булған туған тел һәм туған традицияларҙан мәхрүм ҡалыуын, сит-ят мөхиткә ылығып китеүен, хатта интернет аша аралашып та юлдан тайпылыуын һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ. Бындай шарттар тыуҙырылыуға бер кем дә ғәйепле түгел. Аҙаҡ аҡланыуҙың, һылтаныуҙың, үкенеүҙең файҙаһы самалы ғына. Шуға күрә гәлсәр һауытыбыҙ ватылмаҫ элек уны һаҡлау сараһын күрәйек. Уның иң ышаныслы юлы - беҙ иғтибар итеп тә бармаған һәм ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең бөтөнләй иғтибарынан ситтә тороп ҡалған уйынсыҡтар һәм балаларҙың сәхнәләштерелгән, йәғни үҙҙәре уйлап сығарған ғаилә, балалар баҡсаһы һәм башҡа уйындары аша уларҙың күңел донъяһын өйрәнеү.




**Бала үҙ уйынында ни тураһында хыялланғанын, ниҙәр борсоғанын, атай-әсәй яғынан ҡайһы осраҡта, ниндәй мәлдә хата ебәрелгәнен, уға ҡарата ғәҙел булмаған осраҡтарҙы, ниндәй осраҡта уны шатландырырлыҡ ваҡиғалар булғанын, атай-әсәйҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен һәм башҡа, һәм башҡа ваҡиғаларҙы сағылдыра.**

Тик, әлбиттә, улар уйнатҡан ҡурсаҡтар үҙҙәренән бәләкәйерәк: йә бала, йә ҡусты, йәки һеңле булырға тейеш.

Ә ир балалар атай булып та, ғаилә ҡороп та уйнамай. Улар командир, шофер, летчик булып уйнаусан. Күп осраҡта атаһының һөнәрен ҡабатлаусандар. Ҡайһылай ғына булмаһын, уларҙың уйыны аша ла күңел донъяларын белеп була. Тик был серҙе аҙаҡ уларҙы сыбыртҡылау өсөн файҙаланырға түгел, ә үҙенде атай-әсәй булараҡ тәрбиәләү, баланы артабан ниндәй йүнәлештә үҫтереү, ҡайҙа яңылышлыҡ ебәргәнеңде аңлау өсөн кәрәк. Бала һиңә асмаған серен уйынсыҡтарына нығыраҡ аса. Ул уйнағанда бөтөн эске донъяһын һинең усыңа һала. Өйрән генә.

Ҡыҫҡаһы, әйтергә теләгән фекерҙең әрәсәһе шунда: баланың эске донъяһын тәрбиәләү атай-әсәйҙең иң мөһим, мөҡәддәс бурыстарының береһе. Ә был донъяға инеүҙең иң ышаныслы юлы - бала күңелен аңлау. Бала күңелен аңлауҙың һыналған ысулдарының береһе - уның уйынына ҡарата иғтибарлы булыу. Һүҙ ыңғайында әйтеп китеү урынлы булыр: ғаиләлә ишле, тиңерәк үҫкән балалар үҙҙәре уйлап сығарған был донъяларында онотолоп бирелеп уйнай һәм тап ошондай уйындар аша уларҙа татыулыҡ, ярҙамсыллыҡ, бер-береңде аңлау кеүек нотоҡ уҡып ҡына һеңдереп булмай торған ҡиммәттәр тәрбиәләнә.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

**Беренсе донъя һуғышы - илебеҙ тарихының әлегә тиклем ентекле өйрәнелмәгән биттәренең береһе булып ҡала килә. Совет осоронда ул Империалистик һуғыш, тип нарыҡланып, тарих фәне тарафынан иғтибарға лайыҡ булманы. Ошоноң һөҙөмтәһендә бөгөн беҙ был дәһшәтле ваҡиға тураһында, унда ҡатнашҡан ата-бабаларыбыҙ хаҡында бик аҙ беләбеҙ. Ә улар араһында һәйкәлдәргә лайыҡ шәхестәребеҙ булған. Шул ҡаһармандарҙың береһе - арҙаҡлы башҡорт дворяндары Сыртлановтар нәҫеленән булған батша армияһы генералы Рауил Сыртланов.**

# РӘСӘЙ ӨСӨН БАШЫН ҺАЛҒАНДАР,

## йәки Беренсе донъя һуғышы геройы, башҡорт генералы Рауил Сыртланов тураһында

Сыртлановтар XX быуат башында башҡорт дворяндары араһынан юғары хәрби дәрәжәләргә күтәрелгән, абруйлы нәҫелдән булған. Улар - ҡаңлы ырыуы башҡорттары. Сығыштары менән Ҡаңлы олоҫо Шланлыкүл ауылынан (хәҙерге Бүздәк районы). Нәҫел Сыртлан Айыҭҡолов атлы кешенән тарала. Уның улан-ейәндәре кантон идаралығы осоронда (1798-1865) хәрби хеҙмәттә булып, абруй ҡаҙана. Указлы мулла Ишбулды Сыртлановтың (1757-1833) уландары Шиһабетдин Башҡорт ғәскәрендә поход яҫаулы булып хеҙмәт итә, 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнаша, Шаһиәхмәт - йорт старшинаһы, Шаһимәрҙән - старшина ярҙамсыһы, Мифтахетдин менән Әбделваһап - урядник дәрәжәһендә була. Шулар араһынан Шаһигардан 12-се башҡорт кантоны башлығы дәрәжәһенә тиклем күтәрелә. Ғәскәри старшина званиеһы ала. Бынан тыш, уның ике тирмәне һәм йылҡы заводы була.

Шаһигардан кантондың уландары яҡшы хәрби белем алып, башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итәләр. Өлкән улы Арыҫланбәк (1830 йылғы) зауряд-сотник, 21-се башҡорт кантоны башлығы ярҙамсыһы була. Шаһисолтан (1834 йылғы) исемле улы Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусын тамамлап, һуңынан 20-се башҡорт кантонына етәкселек итә.

Шаһихәйҙәр (1847 йылғы) тигән улы шулай уҡ кадет корпусында белем ала. Артабан хәрби хеҙмәтен Урта Азияла дауам итә. Байтаҡ йылдар Сәмәрҡәнд ҡалаһында Рус армияһының хәрби-халыҡ идаралығында бүлек начальнигы вазифаһын башҡара. Капитан званиеһын ала. Хәрби хеҙмәттән ҡайтҡас, тыуған ауылы Шланлыкүлдә йәшәй. Бәләбәй өйәҙендә 2200 дисәтинә ере була. 1878-1883, 1887-1908 йылдарҙа Бәләбәй өйәҙ земство йыйылышының гласныйы (депутаты) вазифаһын йөкмәй. 1892 йылдан Өфө губернаһы ҡала эштәре буйынса присутствие ағзаһы итеп һайлана. Халыҡ уны Шәһихәйҙәр түрә, тип йөрөтә. 1906 йылда Николай батша манифесынан һуң илдә башланған ижтимағи үҙгәрештәргә Шаһихәйҙәр Сыртланов та әүҙем ҡушыла. Шул уҡ йылда Өфө губернаһы башҡорттары исеменән 1-се Рәсәй Думаһына депутат итеп һайлана. Бында ул үҙенең арҡаҙаштары менән Иттифаҡ әл-мөслимин, йәғни Рәсәй мосолмандары союзы ойоштора. Думала башҡорттарҙың ер мәнфәғәтен яҡлап сығыш яһай.

Шаһихәйҙәр Сыртлановтың дүрт улынан өсәүһе үҙе кеүек үк хәрби хеҙмәт юлын һайлай. Өлкән улы Ғәлиәскәр (1875 йылғы) Ырымбурҙағы Неплюев кадет корпусында уҡый, артабан Мәскәүҙәге Александр хәрби училищеһында белем ала. Литвалағы лейб-гвардия полкында хәрби хеҙмәт юлын башлай. 1903 йылда Санкт-Петербургтағы Хәрби-юридик академияны уңышлы тамамлап, Хәрби министрлыҡтың Баш хәрби-суд идаралығында хеҙмәт итә. Подполковник дәрәжәһен ала. 1905 йылдан Санкт-Петербург хәрби судында адвокат булып эшләй. 1906 йылда инде хәрби хеҙмәттән китеп, Ғәлиәскәр Сыртланов тулыһынса адвокатлыҡ практикаһы менән мәшғүл була. 1907 йылда 3-сө Дәүләт думаһы депутаты итеп һайлана. Әммә 1912 йылда фажиғәле рәүештә һәләк була. "Ғәлиәскәр Сыртланов 1917 йылда иҫән булһа, мотлаҡ башҡорт милли хәрәкәтен етәкләр ине", тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Әхмәт-Зәки Вәлиди.

Шаһихәйҙәр Сыртлановтың икенсе улы - Рауил Сыртланов (1878 йылғы) шулай уҡ атаһы юлын һайлап, тәүге хәрби белемде 2-се Ырымбур кадет корпусында ала. 1898 йылда Санкт-Петербургтағы Михайловский артиллерия училищеһен тамамлай. Училищенан һуң гвардия подпоручигы чинында лейб-гвардияның 3-сө артиллерия бригадаһында хеҙмәт итә.

1902 йылда Рауил Сыртланов поручик дәрәжәһенә күтәрелә. Киләһе йылына Санкт-Петербург ҡалаһында Генераль штабтың Николай батша академияһына уҡырға инә. Бында дворян балалары хәрби белем ала. Академияла уҡыу курсы ике йыл була. Уҡыу тәртибе ике төрҙән торған: практик класс һәм теоретик класс. Академияны экстерн ысулы менән дә тамамлау мөмкинлеге булған. Академияны тамамлаусылар өс разрядҡа бүленгән. 1-се разряд буйынса уҡыу йортон тамамлаған офицерҙар сираттағы чин алып сыҡҡандар, 2-се разрядҡа ҡарағандар үҙҙәренең чины менән сыҡҡандар, ә 3-сө разряд буйынса академияны бөткәндәр үҙ частарына ҡайтарылған. Ә 1-се, 2-се разрядлы офицерҙар Генераль штаб ҡарамағына күсерелгән. Рауил Сыртланов академияны 1905 йылда 1-се разряд буйынса тамамлай. Ул гвардия штабс-капитаны (хәҙергесә капитан) чины алып сыға. Батша армияһында гвардия чиндары ябай армия званиелары менән сағыштырғанда бер баҫҡысҡа юғары торған. Шуға күрә лә, Р. Сыртланов бер үк ваҡытта капитан чины (хәҙергесә майор) йөрөтөргә хоҡуҡлы була.

Академияла уҡыған осоронда Рәсәй менән Япония араһында һуғыш башлана. Р. Сыртланов унда ла ҡатнашып өлгөрә. Генераль штаб академияһының курсанты булараҡ, берәй хәрби берләшмә йәки частың штабында хеҙмәт иткәндер. 1905 йылда алған тәүге ордены - 4-се дәрәжәләге Изге Анна ордены ла ошо хәрби кампания менән бәйле булһа кәрәк. Сөнки 4-се дәрәжәләге Изге Анна ордены тик хәрби награда иҫәпләнгән һәм түшкә түгел, ә ҡылысҡа беркетелгән (һүрәтте ҡарағыҙ) һәм ҡылысҡа "За храбрость" тигән һүҙҙәр яҙылған. Ғәҙәттә, ул ҡылысты "Аннинское оружие", тип атап йөрөткәндәр. Шулай уҡ ҡылысҡа ордендың таҫмаһы төҫөндәге суҡлы таҫма (темляк) тағыр булғандар.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**
**(Дауамы бар).**



4-се дәрәжәләге Изге Георгий ордены

**Генерал Рауил Сыртлановтың наградалары**



3-сө дәрәжәләге Изге Анна ордены



3-сө дәрәжәләге Изге Станислав ордены



4-се дәрәжәләге Анна орденын ҡуйып йөрөү өсөн "Анна ҡоралы" (ҡылысы)



"Анна ҡоралына" ҡуйыла торған 4-се дәрәжәләге Анна ордены



Генерал Сыртланов ҡулына тотоп, атакаға ташланған 166-сы Ровнен пехота полкы байрағы

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

## Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

XIX быуат һуңында башҡорттар араһында *кейеҙ эшләпәләр* киң таралыу ала. Улар ике төрлө була: ярымшар формаһында, тығыҙ итеп баҫылған, ситтәре артыҡ ҙур түгел, улар өҫкә бөкләп ҡуйыла (һүрәт) һәм конус формаһында, төбө тәрән түгел һәм ситтәре лә артыҡ ҙур түгел, улар өҫкә күтәрелмәй, бик йыш төшөрөлөп ҡуйыла. Икенсе формаһы - йомшаҡ һәм артыҡ тығыҙ баҫылмай. Кейеҙ эшләпәләрҙең урындағы төрҙәре тип уларҙың яҫылығын, киҫешендә дуға һымаҡ булғандарын, ситтәре киң булып һәленеп торғандарын һәм ситтәренең алдан һәм арттан ҡыҫҡартылғандарын атарға мөмкин. Бындай эшләпәләрҙе, нигеҙҙә, ҡарттар һәм үҙәк, өлөшләтә көнбайыш Башҡортостанда диндарҙар кейгән. Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар бөтөнләй эшләпә кеймәгән.



Ирҙәр баш кейеме араһында *ҡолаҡсын* айырым ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра (һүрәт). Рустарҙа ул малахай атамаһы аҫтында билдәле. Улар тураһында В. М. Черемшанский, улар сәйер формала, ҡанаттары һәм елкәне ҡаплап тоған ҡойроҡтары бар, тип яҙа. Һүрәттән күренеүенсә, ҡолаҡсын - түбәһе осло булған, алғы өлөшөндә маңлайҙы ҡаплаған козырегы булған, биттең ян-яғын ҡаплап торған оҙон ҡолаҡлы һәм эйәк аҫтында бәйләп ҡуйылған һәм арттан елкәне һәм муйынды ҡаплап торған баш кейеме. Ҡолаҡсын һарыҡ йәки төлкө тиреһенән тегелгән һәм өҫтөнән туҡыма менән тышланған. Тышланмаған ҡолаҡсындар бик һирәк осраған. Ҡайһы бер ваҡытта, бигерәк тә *төлкө ҡолаҡсындын*, өҫкө өлөшө кейеҙҙән тегелгән һәм шул арҡала үҙенең бейек, пирамидаль формаһын һаҡлаған, уның тирә-яғына тире тегелгән, ҡыҙыл йәки ҡара буҫтау менән тышланған; бынан тыш, байҙар уны уҡа менән ҡайыған. Ҡолаҡсын бигерәк тә дала бурандарында бик йылы һәм уңайлы булған. Ул бик борондан яланда күсмә тормош алып барған малсыларҙың баш кейеме булараҡ билдәле.



XX быуат башында ҡолаҡсын бик һирәк булһа ла Көньяҡ Уралда, Урал аръяғында, көньяҡта һәм көньяҡ-көнбайышта осраштырғылай.

Шундай уҡ баш кейеме, әммә йәйгеһен кейә торғаны *көләпәрә* тип атала. Ул өйҙә туҡылған аҡ буҫтауҙан тегелә, эс ҡуйылмай, уҡа урынына ҡыҙыл буҫтау йәки икенсе туҡыма менән ситләтелә. Көләпәрәнең таралыу районы ҡолаҡсынға ҡарағанда тарыраҡ һәм ул бары тик Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш мөйөшөндә генә осрай.

Башҡорттар һәр ерҙә *иләсә* һәм аҡ һарыҡ йөнөнән бәйләнгән *бирсәткәләр* кейә. Сағыштырмаса һирәк тиренән тегелгән һәм буҫтау менән тышланған *бейәләйҙәр* осрай; шулай уҡ *күн бирсәткәләр* ҙә күренә. Күн бейәләйҙәр ҡайһы берҙә тышланған туҡыма өҫтөнән ҡайыла, ситтәре тире, бик йыш ҡиммәтле йәнлек тиреһе (ҡондоҙ) менән ситләнә.

**✓ *Көрәшкәндә дәғүәсеңде көсһеҙләнгән, аяғы хәлһеҙләнгән мәлендә ҡыҫып алып, әйләндереп һалырға кәрәк. Тап шуның өсөн дә етеҙ булыу, һинең менән көс һынашҡан кешенең тын алышын, уйҙарын тойоу талап ителә.***



**Сочиҙа XXII ҡышҡы Олимпия уйындары башланды. Шул уңайҙан гәзитебеҙ уҡыусыларына берәй профессионал спортсының һүҙен тәҡдим итеү маҡсаты менән таныштарыбыҙҙы, баҫмабыҙҙың дуҫтарын барларға тотондоҡ. Шуларҙың береһен - 2006 йылда Ҡаҙан ҡалаһында үткән Рәсәй чемпионатында 65 кг категорияһына ингән көрәшселәр араһында чемпион титулы яулаусы Рәсәй Федерацияһының спорт мастеры, көрәштән тыш, волейбол, баскетбол, лапта уйындарын, йүгереү менән йөҙөүҙе лә үҙ итеүсе педагогика фәндәре кандидаты Руслан Ғиниәт улы БИКЕМБӘТОВты редакциябыҙға саҡырҙыҡ. Ҡунағыбыҙҙан уның үҙен ҙур спортҡа илткән һуҡмаҡтар, гөмүмән, спорт, милли көрәштең киләсәге, уның үҙенсәлекле яҡтары һәм XXII ҡышҡы Олимпия уйындарында ҡатнашыусы өмөтлө Башҡортостан спортсылары тураһында һөйләүен үтендек. Һорауҙарыбыҙға тулы яуап биреүҙән тыш, әңгәмәсебеҙ үҙен күп йылдар буйы борсоған тағы бер тема - милләтебеҙҙең һаулығын, физик көсөн арттырыуҙың ҡайһы бер ысулдары тураһындағы фекерҙәре менән дә уртаҡлашты. Һүҙ - Руслан Ғиниәт улына.**

# АТ АРБАҺЫН ҺӨЙРӘП ҠАРА—

## еңеүҙәргә юл шунан да башлана

### Бала саҡтан ылыҡтырҙылар

Тыуған ауылыбыҙҙағы урта мәктәптә уҡығанда уҡ синыфыбыҙ менән спортка ылыҡтыҡ. Быға Фәнисә Хөсәйенова, Булат Арыҫланбаев кеүек физкультура уҡытыусылары, көрәш буйынса остазыбыҙ Рауил ағай Иҙелбаев, ата-әсәләребеҙ туранан-тура йоғонто яһаны. Атайым ҡыҫҡа араға йүгереүгә оҫта ине - ярыштарҙа йәштәштәренән дә, йәшерәктәрҙән дә уға бер кем дә етә алмай ине. Уның етеҙлеге минә лә бирелгәндер инде, минә лә йүгереүҙең тап ошо төрө еңелерәк бирелде. Синыфыбыҙҙа ун биш шуҡ, тиктормаҫ малайҙарҙың (биш ҡыҙ менән) бергә уҡыуы ла ыңғай роль уйнағандыр, бәлки. Беҙ, малайҙар, үҙ-ара көн һайын көрәшә, һуғыша инек. 6-сы синыфтан көрәш түңәрәгенә барып яҙылдыҡ та, Рауил ағай ҡанаты аҫтында шөғөлләнә башланыҡ. Синыфташ егеттәр район кимәлендә 2-се, 3-сө урындар яулаһа ла, мин үҙем әллә ни уңышҡа өлгәшә алмай инем әле. Синыфыбыҙ менән волейбол, баскетбол буйынса ла районда беҙгә етеүсе булманы. Шул осорҙа футбол буйынса ла Иҫәнголда өсөнсө урын яулауыбыҙ хәтеремдә.

Һүҙемде юҡҡа ғына бала саҡтан башламаным. Кешегә сәләмәт тормошҡа һөйөү бала сағынан һалынырға тейеш. Шулай икән, үҫә төшкәс, бала үҙенә оҡшаған өлкәне барыбер һайлай ул. Минең менән дә шулай булды бит. 1995 йылда ул саҡтағы Башҡорт дәүләт педагогия институтының Сибай филиалына уҡырға ингәс, ятаҡта күрше Бикбау, Муйнаҡ ауылдарынан көрәшсе егеттәр менән бер бүлмәлә йәшәнек. Теге егеттәр көрәш буйынса республика ярыштарында ҡатнаша торғайны. Уларҙың күнекмәләрен ҡарап йөрөй торғас, миндә лә сәм уянып китте бит. Бер көндө тегеләр менән көрәшеп ҡарағайным, еңдем дә ҡуйҙым, малай! Күп тә үтмәй, үҙем дә көрәш түңәрәгендә шөғөлләнә башланым. Институтты тамамлағандан һуң ике йыл Физик культура кафедраһында ассистент булып эшләнем, артабан өс йыл Силәбе ҡалаһында Урал дәүләт физик культура академияһында аспирантурала уҡыным, бер ыңғай көрәш түңәрәгенән етәкләнем. Минең түңәрәккә Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ райондарынан, Миәс ҡалаһынан башҡорт егеттәре йөрөнө. Йәйҙәрен уларҙың тыуған райондарында үткән һабантуйҙарҙа көрәшеп, гел еңеүсе булып йөрөнөк. Кандидатлыҡ диссертацияһын Айтуған Вәкил улы Хажин етәкселегендә яҡланым да, йәнә Сибай институтына эшкә ҡайттым. Унда минә Физик культура һәм спорт кафедраһы мөдире вазифаһын ышанып тапшырҙылар. Рәсәй чемпионатында еңеүҙе ошо осорҙа яуланым. Тап ошо миҙгелдә Рәфил Буранбаев, Шамил Шәмиғолов, Рөстәм Хәлитов кеүек Рәсәй чемпиондары һәм дәүләт кимәлендәге ярыштар призерҙары тәрбиәләнем. Тренер булараҡ, ошондай бәләкәй генә ҡыуаныстар ҙа кисерергә тура килде.



***Күптәр бөгөн башҡорт милли көрәшен, һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс спорт төрө, тип ҡарай. Бындай ҡараш, тәү сиратта, йылына бер тапҡыр ғына һабантуйҙарҙа көрәшкән ир-уҙамандарыбыҙҙың, алдан әҙерләнмәйенсә майҙанға сығып, ҡабырғаһын йә башҡа ерен имгәтеүе арҡаһында барлыҡҡа килде. Көрәш буйынса секцияға йөрөргә теләгән улдарына ололар: "Ҡуй, атайың һымаҡ имгәнеп ҡуйырһың, йөрөмә!" - тип киҫәтә, ғәҙәттә. Ни өсөн былай килеп сыға? Тәү сиратта, милли көрәш буйынса спорт төрөнә әлеге мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртергә тейешбеҙ. Һабантуйҙарҙа кем етте, шул түгел, ә ныҡлы әҙерлекле спортсыларыбыҙ көрәшергә тейеш. Йыл әйләнәһенә көрәш күнекмәләре үткән кешенең бер ере лә һынмай ҙа, быуыны ла сыҡмай. Һәр кемебеҙ ошо фекерҙе үҫтереп, күңеленә һеңдереп ҡабул итһәк, көрәштең зыяны тураһында түгел, ә файҙаһы тураһында дан таралыр.***

### Көрәш тураһында

"Спорттың көрәш төрөндә ниндәй сифаттар кәрәк?" тип һораһалар, мин "Етеҙлек һәм көс" тип яуап бирәм. Хәҙер ни өсөн етеҙлек кәрәклеген аңлатып үтәйем. Көрәшкәндә һәр саҡ дәғүәсеңде көсһеҙләнгән, аяғы хәлһеҙләнгән һәм тигеҙлеген юғалтҡан мәлендә тотоп алырға һәм ҡыҫып алып, әйләндереп һалырға кәрәк бит инде. Тап шуның өсөн дә етеҙ булыу, һинең менән көс һынашҡан кешенең тын алышын, уйҙарын, булмышын һәм ҡайһы яҡҡа еңелерәк ауырын һиҙеү, тойоу талап ителә. Кешенең ауырлыҡ үҙәге өҫтә була икән, уны аяҡтан йығыуы ла еңелерәк. Шуға күрә, тәжрибәле көрәшселәр әйелеберәк, ергә сүгеберәк йөрөй.

Көрәшкәндә көс тә талап ителә, тип әйткәйнем инде. Ә көстө йыл әйләнәһенә йыйырға, бер кимәлдә һаҡларға тырышырға кәрәк. Юғиһә, "Мин былай ҙа көслөмөн" тип йөрөп, берәй көн биленде биртендереп, һаулығыңа зыян килтереүең бар.

Күптәр бөгөн башҡорт милли көрәшен, һаулыҡ өсөн ҡурҡыныс спорт төрө, тип ҡарай. Бындай ҡараш, тәү сиратта, йылына бер тапҡыр ғына һабантуйҙарҙа көрәшкән ир-уҙамандарыбыҙҙың, алдан әҙерләнмәйенсә майҙанға сығып, ҡабырғаһын йә башҡа ерен имгәтеүе арҡаһында барлыҡҡа килде. Көрәш буйынса секцияға йөрөргә теләгән улдарына ололар: "Ҡуй, атайың һымаҡ имгәнеп ҡуйырһың, йөрөмә!" - тип киҫәтә, ғәҙәттә. Ни өсөн былай килеп сыға? Тәү сиратта, милли көрәш буйынса спорт төрөнә әлеге мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртергә тейешбеҙ. Һабантуйҙарҙа кем етте, шул түгел, ә ныҡлы әҙерлекле спортсыларыбыҙ көрәшергә тейеш. Йыл әйләнәһенә көрәш күнекмәләре үткән кешенең бер ере лә һынмай ҙа, быуыны ла сыҡмай. Һәр кемебеҙ ошо фекерҙе үҫтереп, күңеленә һеңдереп ҡабул итһәк, көрәштең зыяны тураһында түгел, ә файҙаһы тураһында дан таралыр.

Кавказ халыҡтарында грек-рим көрәше киң таралыу тапҡан. Унда ҡайһы ғына үҫмерҙе алма - көрәшсе. Уларҙа йылына бер тапҡыр көрәшеү йолаһы бармы, юҡмы, белмәйем, әммә кавказдар, спорт төрө булараҡ, грек-рим көрәшенә дөрөҫ баҫым яһай, уларҙың егеттәре үҙҙәрен әрмелә лә иркен тота. Ә ниңә беҙҙең егеттәргә лә шулай һау-һаҡ булмаҫҡа? Беҙгә лә үҙебеҙҙең рухҡа яҡын милли көрәш төрө менән булһа ла ныҡлап шөғөлләнергә кәрәк. Көрәш булмаһа, пауэрлифтингмы (төрлө ауырлыҡ күтәреүгә бәйле көс спорты), боксмы, бүтәнеме - үҙебеҙҙең тәбиғәтебеҙгә яраһа, шул еткән. Шорт-тректа ҡытай, япон, корея спортсылары шәп икән, был ошо халыҡтарҙың көс үҙенсәлектәренә бәйле. Көнсығыш халыҡтарының ҡыҫҡа мускулдары ныҡ үҫешкән һәм шуға ла улар тиҙлек талап ителгән спорт төрҙәрендә алдыра. Кениялыларҙың оҙон мускулдары көслө, шуға уларҙың марафон йүгереүселәре билдәле. Ә беҙҙең, башҡорттарҙың, тәбиғәттән бирелгән спорт төрө нимә икән? Хоккейҙы популярлыштыралар ул, ләкин уны барыбыҙ ҙа уйнай алмай - ҡыйбатҡа төшә. Футбол уйынын етерлек кимәлдә үҫтерергә ҡышҡы һыуыҡ осоро ҡамасаулай. Бәлки, спорт залдары эсендә генә шөғөлләнеү мөмкин булған төрҙәргә иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлтергә кәрәктер? Мәҫәлән, шул уҡ пауэрлифтингҡа. Эльбрус Ниғмәтуллин исемле Рәсәйҙең иң көслө кешеһе титулына эйә башҡорт егете быға миҫал була ала. Минең үҙемдең тән төҙөләшөмә ҡарағанда ла, мине волейболсы ла, йөҙөүсе лә тип түгел, бәлки, штанга күтәреүсе итеп күҙ алдына килтереүе еңелерәктер. Бәлки, мин тап ошо төр

буйынса тағы ла алғараҡ киткән булыр инем. Штанга күтәргән саҡта шартлап торған көс һәм шул уҡ етеҙлек кәрәк, ә был сифаттар, йәғни, ҡапыл тоҡанып, вулкан һымаҡ атылыусы көс, беҙҙең башҡортта артығы менән. Ауылдарҙа көслө, бәһлеүән кәүҙәле егеттәр бар ҙа ул, ни өсөндөр, улар профессиональ спортҡа ылығып бармай. Әллә был башҡорттоң һуңғы сиккә ҡәҙәр түҙеп, ниндәйҙер хәл иткес мәлдә генә, бая әйткәнемсә, ҡапыл тоҡанып, вулкан һымаҡ атылыусы көскә эйә булыуынан киләме икән? Нимәне, йәки кемде көтәбеҙ һуң беҙ? Көрәште олимпия уйындары исемлегенә индереүҙәрен көтәбеҙме? Әллә башҡа берәй сәбәп бармы? Минә ҡалһа, ауылдарҙа, районларҙа индивидуаль спортты үҫтереүсе саралар, түңәрәктәр аҙыраҡ. Беҙҙә күберәк команда менән уйнай торған спорт төрҙәренә иғтибар бирелә, ә шәхси, индивидуаль спортты үҫтереү аҡһай. Был юҫыҡта район кимәлендә Йылайыр, Баймаҡ, Бөрйән райондары үҙҙәренсә саралар үткәрә, шуныһы маҡтауға лайыҡ. Мәҫәлән, йылайырҙар - үҙ баһадирҙарын һабантуйҙа ат арбаһын һөйрәтеп, ә бөрйәндәр ауыр таштар ырғытып ярыштыра. Тимәк, улар дөрөҫ юлда. Индивидуаль спортҡа тәүге аҙымды шунан башларға кәрәк.

### Олимпия уйындарында еңер өсөн…

Гватемалала булғанында ил Президенты Владимир Путин быйылғы XXII ҡышҡы Олимпия уйындарын Рәсәйҙә үткәреү хоҡуғын яулағайны. Ярыштарҙы Рәсәйҙең туризм үҙәге булған Сочиҙа - йыл әйләнәһенә йәйге йылы миҙгелле ҡалала үткәрергә ҡарар иткәстәр, барыһы ла аптырашта ҡалғандыр, моғайын. Бейек тауҙарҙа - ҡар, ә тау итәктәрендә - йәшеллек түшәлеп ятыуы, диңгеҙ яры - былар барыһы ла Сочиҙың үҙе бер ҡабатланмаҫ уңышы, минеңсә. Мин был яңылыҡты бик шатланып ҡаршы алдым. Ни өсөн тигәндә, олимпиада үтер ҙә китер, ә ул үткән урын - тарихи урын булып ҡаласаҡ, донъяның, Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан туристарҙы йәлеп итәсәк. Әлбиттә, был сараны үткәрер өсөн илебеҙ бик күп матди сығымдар түкте. Ләкин был сығымдар үҙен аҡлар, тип ышанам. Ултырып ҡалған ҡоролмаларҙы нисек һаҡлау һәм файҙаланыу - икенсе мәсьәлә.

Ул ғына ла түгел, олимпиаданың Рәсәйҙә үтеүе спортсы балаларҙа ла ҙур ынтылыштар уята. Әле яңыраҡ Өфөләге төрлө спорт мәктәптәрендә шөғөлләнеүсе балаларҙы "Искра-IMAX" кинотеатрына Сочиҙа үтәсәк олимпиадаға арнап төшөрөлгән "Чемпиондар" фильмына алып килдек. Ошо балалар берәй мәл Башҡортостанды, халҡыбыҙҙы, Өфөбөҙҙө донъяға билдәле итәсәк бит. Олимпиада чемпионы булмаһалар, донъя чемпионы булырҙар. Ошондай еңеүҙәр милләттең һаулығын, ынтылышын, хатта киләсәген сағылдыра бит.

Мине спортта алмаш әҙерләү-әҙерләмәү проблемаһы һәр саҡ борсой. Кисәге спортсыларыбыҙҙы - биатлонсы Максим Чудовты, Куклеваны, Светлана Ишморатоваларҙы кем алыштырҙы? Бер кем дә юҡ. Быуындар күсәгилешлеген һаҡлар өсөн спортта йөҙ баланы түгел, бер нисә меңәр, ун меңәр баланы әҙерләргә кәрәк, улар араһында мотлаҡ бер-ике чемпион өлгөрәсәк. Йөҙ бала әҙерләүҙән генә файҙа юҡ. Ҡытай халҡы олимпиадаға бер спортсы оҙатып, ул чемпионлыҡ дәрәжәһенә өлгәшһә, уның артынса шундай уҡ физик мөмкинлектәргә эйә булған ун йәш спортсы килә. Конкурентлыҡ көслө булһа, шанстар ҙа арта. Мең спортсы әҙерләр өсөн, алдараҡ әйткәнемсә, милли идея итеп алып, балаларҙы тәғәйен генә бер спорт төрөнә ылыҡтырырға кәрәк. Шул саҡта милләтебеҙ заман ауырыуҙарына әйләнгән эскелеккә, тәмәке, наркотиктарға ылығыу, аҙ хәрәкәтләнеү, интернет ҡоллоғона бирелеү кеүек кире күренештәргә ҡаршы тора алыр ине, минеңсә.

### Беҙҙең спортсылар олимпиадала нисек сығыш яһар?

Билдәле булыуынса, XXII ҡышҡы Олимпия уйындарында 8 спортсыбыҙ - шәхси, ә 6 спортсы команда беренселегендә сығыш яһаясаҡ. Өфөнөң "Агизел" клубынан һайлап алынған алты ҡыҙҙың барыһы ла ситтән килгән спортсы. Шулай ҙа улар Башҡортостандан тип һаналасаҡ. Ҙур өмөт уятҡан спортсыларға килгәндә, саңғыла трамплиндан һикереүсе Дмитрий Васильев быға тиклем төрлө кубоктарҙа ҡатнашып, уңышлы сығыш яһаны. Был юлы ла һынатмаҫ, тип уйлайым. Ошо төр буйынса сығыш яһаясаҡ Илмир Хәзетдиновтың да шансы бар. Ә бына шорттрексыларыбыҙҙың шанстары бөтәһенә ҡарағанда ла юғары. Семен Елистратов менән Руслан Захаров, тәүге булмаһа ла, призлы урын алмай ҡалмаҫ, тип уйлайым. Һәр хәлдә, яҡташтырыбыҙға ла, илебеҙ спортсыларына ла еңеүҙәр теләйек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ Руслан Бикембәтов спортҡа ҡарата үҙенсәлекле фекер ишеттерҙе. Ул спорттың бер төрөн һайлап алып, милли спорт төрөбөҙ кимәленә күтәрергә кәрәклеген белдерҙе. Милли көрәшебеҙҙе лә профессиональ кимәлгә күтәреү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Уның һүҙҙәре гәзит уҡыусы ата-әсәләр ҡолағына салыныр, тип ышанабыҙ.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ХАТА ЕБӘРЕҮ - ҒӘЙЕП ТҮГЕЛ,

## уны төҙәтмәү - ғәйеп

**Былтыр Баймаҡ үҙәк китапханаһында Башҡортостандың ете томлыҡ энциклопедияһы тураһында ҡыҙыҡлы һәм асыҡтан-асыҡ һөйләшеү булды. Унда "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы хеҙмәткәрҙәре, авторҙар төркөмө һәм китап һөйөүселәр ҡатнашты. Кисәлә яңғыраған төп фекер шул булды: ғалимдар, тәжрибәле белгестәр тарафынан ифрат ҙур эш башҡарылған, ул - тиҫтәләгән авторҙың күп йыллыҡ фиҙаҡәр хеҙмәт емеше, беҙҙең күп томлыҡ энциклопедия Рәсәйҙә хаҡлы рәүештә иң яҡшыларҙан һанала һәм башҡалар. Әлеге саранан һуң байтаҡ ваҡыт үтте, әммә мине һаман бер мәсьәлә борсой: урыҫ телендәге энциклопедияла ебәрелгән ҡайһы бер хаталар хәҙер әҙерләнеүсе башҡорт телендәгеһендә ҡабатланмаһын ине.**

Энциклопедияны ижад итеүселәргә мин шәхсән рәхмәтлемен: Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты булараҡ, баҫмала минең турала ла айырым мәғлүмәт бирелгән, йәнә лә Йылайыр районы Юлдыбай ауылы мәктәбенең сығарылыш уҡыусылары араһында телгә алынғанмын. Ошондай уҡ хөрмәткә минең ауылдашым, класташым, Мәскәү профессоры Абрар Ярлыҡапов та лайыҡ булған. Яҡташтарым, коллегаларым ағалы-ҡустылы Сәлимйән һәм Азат Ярмуллиндар өсөн дә ҡыуанам. Тағы килеп, Башҡортостандың шахмат буйынса тәүге гроссмейстеры Эльмира Хәсәнованың исемен күреп тә һөйөндөм. Ул бит Баймаҡ ҡыҙы, уны тренер Зөлфәр Зөбәйеров балалар баҡсаһынан "табып алды" һәм тиҙ арала республика кимәленә сығарҙы. Ләкин был тренер тураһында - ләммим.

Йә, ярай, төп фекерҙән ситкә тайпылмайыҡ. Энциклопедия тураһында фекер алышҡанда Өфө ҡунаҡтарына, башҡа авторҙарға бик күп һораүҙар бирелде, айырым мәсьәләләргә аныҡлыҡ индерелде. Күп томлыҡ баҫманың башҡортса тәржемәһе әҙерләнеүен күҙ уңында тотоп (ул 2015 йылда сығырға тейеш), ҡайһы бер фекерҙәрҙе, тәҡдимдәрҙе гәзит уҡыусылар иғтибарына еткермәксемен. Сөнки теге йәки был мәсьәлә буйынса йәмәғәт фекере тыуһа, ул, минең аңлауымса, энциклопедияға тик файҙа ғына буласаҡ.

Минә, мәҫәлән, Һаҡмар исемендәге йырҙың, эпос геройының, район гәзитенең "Хакмар" тип биреләүе ҡолаҡҡа ятышһыҙ тойолдо. Беҙҙең районда ауыл, колхоз, гәзит исемдәре "Сакмар" тип әйтелә һәм яҙыла. Баҫма авторҙары үҙҙәренең хаҡлығын, транскрипция шулай ҡуша, тип дәлилләй. Ә Һаҡмар йылғаһының "Сакмара" тип бирелеүен нисек аңларға? Географик атамаһының транскрипцияһы башҡасамы ни?

Ҡайһы бер ауыл, йылға, күл исемдәре буйынса ла һүҙ барҙы кисәлә. Аныҡ миҫалдарға күсәйек: Ишбирҙе ауылы - "Ишберда", Ҡуянтау ауылы - "Куянтаево" (тау менән тай араһында ниндәй уртаҡлыҡ?), Билал -"Билялово", Яҡтыкүл - "Банное", Оло Урғаҙа йылғаһы (районыбыҙҙа Урғаҙа ауылы ла бар) "Большая Уртазымка" тип бирелгән. Йырҙарҙа йырланған Төйәләҫ йылғаһы һаман да ҡасандыр бер урыҫ әйткәнсә яманатлы исемдә ҡалдырылған - "Худолаз". Ваҡытында Сибай ҡала Советы Худолаз ауылын Төйәләҫкә әйләндереп, дөрөҫлөктө аяҡҡа баҫтырғайны. Ә бына Өфөләге иптәштәр быға баҙнат итмәгән, йәл. Ирәндек тауына бәйле күп атамалар (хужалыҡ, кинотеатр, ял базаһы, магазин) беҙҙә "Ирандык" тип бирелә, ә энциклопедияла - "Ирендык". Был турала бер абруйлы ир-уҙаман шундай фекер әйтә: беҙ һис тә "иренеп", ялҡауланып йәшәмәйбеҙ.

Әле миҫалға килтерелгән һәм башҡа телебеҙгә ятышһыҙ атамалар ҡайҙан килә һуң? Башҡорттоң ауылдарын, уның ерҙәрендәге географик атамаларҙы рәсмиләштереп, ҡағыҙға төшөрөүҙә күп йылдар әлек урыҫтар туранан-тура ҡатнашҡан. Улар күп осраҡта халҡыбыҙҙың теленә, уның үҙенсәлектәренә иғтибар итмәйенсә, үҙҙәренсә, нисек теләһә, шулай яҙған, йәғни хаталар ебәргән. Күпме ваҡыт үтһә лә, улар төҙәтелмәй, сөнки беҙ һаман да "оло ағайға" табынып йәшәйбеҙ. Ә бит дәүләт телебеҙ бар, кәрәк һанаһаҡ, тейешле ҡарарҙар сығарып, үҙгәртергә (дөрөҫләтергә) мөмкин. Был йәһәттән Өфөнән килгән хеҙмәткәр бына ниндәй аңлатма бирҙе: "Карталарҙа, башҡа баҫмаларҙа нисек яҙылған, беҙ ҙә шулай бирәбеҙ. Әйтәйек, Камчаткала берәү беҙҙең төҙәтеп яҙғанды ҡарар ҙа, хата тип уйлар". Ә нишләп әле беҙ иң элек Баймаҡ башҡортон, Баймаҡ урыҫын күҙ уңында тотмайынса, Камчатка урыҫын уйларға тейеш?

Айырым шәхестәр тураһында ла һүҙ булды фекер алышыуҙа. Бер томлыҡ "Башкортостан. Краткая энциклопедия" баҫмаһында Баймаҡ яугиры, полк командиры подполковник Исхаҡ Ғүмәровтың Империя концелярияһын алыуҙа ҡатнашҡанлығы тураһында яҙылған. Ә бына ете томлыҡта уға урын табылмаған. Бер ағай шундай мәсьәлә күтәрҙе: Ленин ордены, СССР, РСФСР Юғары Советтары депутаттары булған данлы ул-ҡыҙҙарыбыҙ китапта юҡ, ә абруйы төшкән яҙыусылар - бар.

Әлбиттә, энциклопедияға теге йәки был шәхесте биреү-бирмәү мәсьәләһе бик сетерекле, сөнки уларҙы нимәнән сығып баһаларға, тигән һорау тыуа. Яҙыусыларға килгәндә, уларҙың күпме китап баҫтырып сығарыуы күҙ уңында тотола. Ә бит күп китап яҙып та, халыҡ хөрмәтен яуламаҫҡа мөмкин, һәм киреһенсә булыуы ла ихтимал. Бөтә республикаға киң таралған беҙҙең төбәк яҙыусыһы баҫмала юҡ. Үҙенән һорағас, ул былай тине: "Мәғлүмәттәр ебәргәйнем, нишләп бирмәгәндәрҙер, белмәйем, гөмүмән, был мәсьәлә мине бик ҡыҙыҡһындырмай ҙа".

6 томда ебәрелгән 25 хата тураһында мәғлүмәт бар. Улар, башлыса, корректор хаталары һәм тексты бик боҙмайҙар ҙа. Ә бына түбәндәге хаталар әҙме-күпме кире фекер тыуҙыра. Ғәзелша һәм Солтан приискылары - бер үк, тип яҙылған. Асылда иһә, улар айырым приискылар, аралары - 30-35 км. Алыҫлыҡҡа бәйле тағы бер миҫал. Юлдыбай ауылынан Сибайға тиклем 95 км., тип яҙылған. Асылда, Юлдыбайҙан Баймаҡҡа - 40 км., ә Баймаҡтан Сибайға - 35 (Баймаҡ аша үтмәй, ҡайҙа аҙашып, урап йөрөйҙәр икән?). Быныһы - мәрәкә хәл, тип кенә ҡабул итергә мөмкин. Ә беҙҙең театрҙы "урлағандар" өсөн баймаҡтар үпкә белдерә. Актер, режиссер Ғәйфулла Сарбаев тураһында текста бына ниндәй мәғлүмәт бирелә: "... В 1933-35г.г. актер Абзелиловского колхозно-совхозного театра..." Һүҙ бит Баймаҡ театры тураһында бара!

Минең яҙмала, моғайын, бәхәсле урындар ҙа барҙыр. Мин үҙемдең һәм айырым иптәштәрҙең шәхси фекерҙәрен яҙҙым. Улар урындағы халыҡтың йәшәйешенә, һөйләшенә бәйле.

**Рәшит ҮТӘЕВ,**
**ветеран-журналист, Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

# ЭСТАФЕТА



Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

(Хикәйә)

-Бәү, бәү!

Ыржайҙар уларға уйламағанда-көтмәгәндә ташланды. Улар тәрән көрттә көслө күкрәктәре менән ярып, ырғый-ырғый йәнлектәр утлап йөрөгән аҡланға яҡынлай башлауы булды, ҡар бураны сыҡтымы ни: ташланыусыларҙың берсә өҫкә, берсә аҫҡа ырғандаған кәүҙәләре ҡар болото араһында сала-сола ғына күҙгә эленеп ҡалды. Тертелдәк менән Тырт-Мырттың әсәһе Инәк уларҙы, тештәре һәр саҡ ыржайып торғанға күрә, шулай ыржай тип атай. Ҡанэскестәр, аяуһыҙ заттар улар, күпме тоҡомдаштарының башына еттеләр. Ыржайҙар, кешеләр теле менән әйткәндә - бүреләр. Ә бүреләрҙе иң яуыз йән, ыржай тип иҫәпләүсе үлән менән туҡланыусы йәнлектәрҙең үҙҙәрен кешеләр яғымлы ғына итеп ҡоралай, илек йә ҡыр кәзәһе тип атап йөрөтә.

Элегерәк кешеләр үҙҙәре лә ҡоралайҙарҙы күпләп ут бөркөүсе "төкөргөс" менән саҡтырып, тиреһен тунап, итен алалар ине. Ҡоралайҙар өсөн мылтыҡ - төкөргөс. Ғифриттәй ҡарағош менән күктән, ҡаргиҙәр дөрпөлдәк менән ер өҫтөнән дә ҡыуып ҡыра ине уларҙың ҡыр кәзәһе тоҡомон ике аяҡлы заттар. Кешеләрҙе ҡоралайҙар Төҙтәкә тип атап йөрөтә. Артҡы аяҡтарына баҫып, кәүҙәләрен төҙ тотоп, ҡулдарын буш көйө һелтәп йөрөткәнгә күрә шулай атайҙарҙыр инде. Тәкә, тиеүҙәре эре, һауалы булыуҙарына, йәнлектәргә өҫтән аҫҡа ҡарап йөрөүҙәренә ишара, күрәһең. Һуңғы ваҡытта Төҙтәкәләрҙең ҡоралайҙарға ҡарата мөнәсәбәте ҡырҡа, шул уҡ ваҡытта ыңғай яҡҡа үҙгәреп бара һымаҡ. Кешеләр хатта уларҙың төйәк иткән урынын "ҡурсаулыҡ" тигән хикмәтле исем менән атап, ҡырыу урынына, киреһенсә, үҙҙәрен һаҡлай, яҡлай башланы. Ҡоралайҙар был хикмәтле урындың ни өсөн ҡурсаулыҡ тип аталғанын аңлап бөтөрмәһәләр, уның Төҙтәкәләрҙән ышыҡ икәнлеген дә яҡшы тоя. Шулай булмай һуң: шул уҡ кешеләр ҡурсаулыҡтан ситтә уларға рәхәтләнеп һунар итә, ә инде уның бер ниндәй ҙә кәртә, билдә менән күрһәтелмәгән сиген үтеү, йәғни ҡурсаулыҡ эсенә инеү менән, тәүге ниәтенән баш тартып, һаҡларға тотона. Бер үк мылтыҡ ҡурсаулыҡтың эсендә һәм тышында ике төрлө тәғәйенләнештә йөрөй. Кешеләрҙең ни өсөн шулай ике йөҙлө булыуын ғына аңларлыҡ хәлдә түгел илектәр. Аңларҙар ине лә, уйлай ғына белмәйҙәр шул улар. Әгәр ҙә улар үҙҙәренең күпләп ҡырылып, зат буларак юҡҡа сығыу ҡурҡынысы тыуыу сәбәпле, дәүләттең махсус ҡарары менән ошондай ҡурсаулыҡ ойошторолоуын аңлаған, белгән булһалар, Төҙтәкәләр хаҡында ике төрлө ҡараштa булмаҫтар ине. Валлаһи...

Аптыраҡ. Был хәлгә ҡарата ҡоралайҙар, ана шулай, аптырай ғына алаларҙыр, булһа кәрәк. Тәбиғәттә иһә, "Көслөнөкө - замана" тип аталған тәбиғи һайланмыш ҡануны хөкөм һөрә. Шуға күрәлерме, ҡурсаулыҡ төшөнсәһе тик тәбиғи инстинкт ярҙамында ғына көн иткән ҡоралайҙарҙың аңлауына һыйып бөтмәгәнгә күрә, улар был хаҡта бер нисек тә уйлай алмай. Ҡыр кәзәләре тәүҙә кешеләрҙең ҡурсаулыҡ ойоштороуға бәйле был ҡылығын үҙҙәрен аулау өсөн ҡоролған хәйлә, мәкере, һуҡмаҡтарына һалынған ҡапҡаны һымаҡ ҡабул итеп, бер нисә тиҫтә йыл самаһы үҙҙәренсә, йәғни тик тәбиғи инстинкттары буйынса йәшәй бирҙе. Улар әҙәм балаларының үҙҙәренә ҡарата булған ошондай һаҡсыл һәм ихлас мөнәсәбәтен бар тип тә белмәне. Хатта йәйҙәр ҡоро килгән йылдарҙа кешеләрҙең уларға тип ҡурсаулыҡ эсенә һипкән танһыҡ ризығын да күрмәмешкә һалышты ҡыр кәзәләре. Ризыҡ ерҙә һибелеп, туҙырап ята, барыбер унда ниндәйҙер бер мәкер бар кеүек. Буштың атаһы үлгән. Ерҙә ятҡан нәмә ризыҡ түгел, ә уларҙың тояҡтарын шапылдатып эләктерер ҡапҡан, ҡармап алыр тоҙаҡ шулай ризыҡ рәүешен алған һымаҡ. Әммә һуңғы йылда ҡурсаулыҡта килеп тыуған бер ғибрәтле ваҡиға ҡыр кәзәләрен Төҙтәкәләргә илтифат менән боролоп ҡарарға мәжбүр итте барыбер.

Ул көндө кәзәләр һутлы үлән эҙләп, ҡурсаулыҡтан күпкә ситкә сығып, иртәнге утлауҙа йөрөй ине. Һиҙгер йәндәр тәмәке еҫен әллә ҡайҙан тойоп ҡалып, үҙҙәренә һунар итергә килеүселәрҙең утлы "төкөргөс"тәре телгә килеүҙән күпкә алда ҡурсаулыҡ яғына ырғандай-ырғандай ҡуҙғалды. Төҙтәкәләр уларҙы күрмәй ҙә ҡалды. Ике йөҙ-өс йөҙ аҙым самаһы һикергәндән һуң туҡталып ҡалалар ҙа, хәүеф барлығын-юҡлығын тикшергәс, тағы ла алға күсәләр. Бер нисә тапҡыр тын алмаштырып, һикерәндәп алғандан һуң ҡоралайҙар ҡурсаулыҡтың сигенә лә килеп төртөлдөләр. Иркен һулыш алып, ҡалған юлды йүгермәй генә, алдарында осраған танһыҡ үләндәрҙе йолҡа-ҡаба барырға ине ниәттәре. Килеп сыҡманы. Ҡурсаулыҡтың бейек ҡая һәм тәрән һыулы йылға яры менән ҡаймаланған тар ғына үткәленән ыржайҙар өйөрө килеп сыҡмаһынмы!

Айыуҙан ҡасҡан - бүрегә, тигән һымаҡ килеп сыҡты. Ҡурсаулыҡ шырлығына инеп, эҙ юғалтырға өлгөрмәй ҡалған кәзәләр, ҡайҙа баҫырға, ни ҡыларға белмәй, әле генә үҙҙәре ҡасып килгән яҡҡа кирегә боролорға мәжбүр булды. Тәбиғи булмыштары, эске тойомлауҙары кешеләргә яҡыныраҡ булыу юлын һайланы кеүек. Ҡоралайҙар ҡурсаулыҡтың үҙәк менән билдәләнгән сигенә килеп еткәс, ике урталыҡта туҡталып, ҡамауҙа ҡалды. Эс яҡта эстәре үткәшкән ас ыржайҙар, тыш яҡта ике аяҡлы дошмандары - утлы "төкөргөс" тотҡан әҙәмдәр. Кәзәләр бер хәҡиҡәтте яҡшы аңлай: уларҙы әлегә ошо үҙәктә йәғни ҡурсаулыҡ сигендә тороуҙары ғына ҡотҡара. Кешеләрҙән ҡасып, эскә китһәләр, ыржайҙар өҙгөсләй, ыржайҙарҙан өркөп үҙәк башына менһәләр, уларҙы Төҙтәкәләрҙең утлы "төкөргөс"тәр сағып аласаҡ. Әммә ике яҡтың да уларға ҡарата этлек эшләргә аяҡ-ҡулдары бығаулы. Әҙәмдәр ҡурсаулыҡ эсендә һунар итә алмай, ыржайҙар әҙәмдәрҙән шөрләп ҡоралайҙарға ташланырға баҙнаты етмәйенсә, ауыҙҙарынан шайыҡтарын ағыҙып, үҙҙәрен саҡ-саҡ тыйып тота.

Был көсөргәнеш тағы ла күпмегә һуҙылыр ине икән, тәүге аҙымды Төҙтәкәләр яһаны. Улар ҡыр кәзәләрен уртаға ҡалдырып, ике яҡтан урап сығып, ҡурсаулыҡ эсенә үтте лә, ыржайҙар йөшенеп һаҡҡан һыуаҡлыҡтарға тоҫмаллап шарт та шорт атырға тотондо. Ыржайҙар эштең ҡайҙа барғанын шундуҡ аңлап, ҡурсаулыҡтан ситкә табан үксәһен ялтыратты. Берәһенең әсе итеп сыйнаған тауышы ла ишетелде. Пуля эләккәндер үҙенә. Ҡоралайҙар әҙәмдәр тарафынан асылған "йәшел коридор" аша ҡурсаулыҡ эсенә иркен үтте. Тап ошо көндән башлап ҡыр кәзәләре ҡурсаулыҡ эсендә әҙәм балаларынан ҡурҡмаҫҡа өйрәнде, үҙҙәренә тип һалынған танһыҡ ризыҡтан да ауыҙ итә башланы. Тик улар һаман да ҡурсаулыҡтан ситкә сыҡҡанда әҙәмдәрҙең үҙҙәренә мөнәсәбәте ни өсөн ҡырҡа үҙгәреүен аңларлыҡ хәлдә түгелдәр. Мәңге аңлай ҙа алмаҫтар инде.

Әммә, барыбер, ҡурсаулыҡ ҡоралайҙарҙы төп дошмандарынан - ыржайҙарҙан, төлкөбайҙарҙан, тайыш табандарҙан, йылғыр һеләүһендәрҙән һаҡлай алмай ине. Сөнки бында йыртҡыс хайуандар ҙа ҡыр кәзәләре кеүек үк яҡлаулы һәм һаҡлаулы, йәғни әҙәм балалары нисек кенә ҡеүәтле һәм аҡыллы булмаһын, ҡурсаулыҡ эсендә лә, уның тышында ла йәнлектәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡыҫыла алмай. Дөрөҫөрәге, алмай түгел, теләмәй. Ни өсөн? Донъялағы иң камил, иң аҡыллы, иң көслө заттар, имеш. Көслө булғастары ниңә көсһеҙҙәрҙе яҡламай һуң улар? Ҡуяндарҙы - төлкөләрҙән, ҡоралайҙарҙы - бүреләрҙән, мышыларҙы - айыуҙарҙан, турғайҙарҙы - тәғәрләктән, сысҡандарҙы - типкестәрҙән, селбәрәләрҙе - суртандарҙан... Был һорауҙарға ла ҡоралайҙар бер ҡасан да яуап таба алмаҫ инде.

Ҡоралайҙар ике урталыҡта ҡамалып ҡалған теге көндә иһә, ҡурсаулыҡ сигендә үҙҙәренә күҙ йәштәре түгелеп, мөлдөрәп ҡарап торған йәнлектәрҙе йәлләне булһа кәрәк Төҙтәкәләр. Улайһа, ҡурсаулыҡтан ситтә шул уҡ йәнлектәрҙе ни өсөн аямайса ҡыра һуң шул уҡ кешеләр? Төҙтәкәләрҙең ошондай ике йөҙлө булыуҙарының сәбәбе нимәлә? Әгәр ҙә ҡоралайҙар, ысынлап та, уйларға, фекер йөрөтөргә һәләтле булһалар, бер хәҡиҡәтте һүҙһеҙ ҙә аңлап, үҙҙәрен һаҡлап, яҡлап маташҡан әҙәмдәр йөрөгән был урмандан баштары һуҡҡан яҡҡа сығып олағырҙар ине. Хәйер, урмандан ғынамы икән?

Төҙтәкәләр шул уҡ ыржайҙар һымаҡ ҡоралайҙарҙың һутлы, үҙҙәренең лөғәте менән әйткәндә, деликатес итенә дәғүә иткәнгә күрә генә уларҙы ыржайҙарҙың аҙау тештәренән йолоп алып ҡалды бит теге көндө . Улар ҡоралайҙарҙы шул уҡ урында ҡырып һалырҙар ине, ҡурсаулыҡ эсендә һунар иткән өсөн штраф санкциялары уларҙың тәтегә баҫҡан бармағын шаҡарҙы ғына. Әҙәмдәр теге көндө лә ыржайҙарҙы үҙҙәренең табыштарынан ҡыуып ебәргәндән һуң ҡурсаулыҡтан күп тә түгел ара ситкә китеп, ҡоралайҙарҙың кире әйләнеп килеүен көтөп, боҫоп ятты. Әлбиттә, Төҙтәкәләр унда тик кенә ятманы. Милли һунар үҙенсәлектәренә ярашлы, ысын мәғәнәһендә гөжбан ойоштторҙо. Байрам итте. Башта шым ғына хәмер һемереүсе әҙәмдәр, эстәренә төшкән хәмерҙәре үҙҙәренә әмер бирә башлағас, тәмәке тарта башланы, тағы ла бер аҙҙан мәрәкә һөйләшеп көлөшөүҙәр, һүгенеү тауыштары ишетелеп торҙо ла, йырларға тотондолар. Урмандағы бушлай кәнсирт таңға тиклем дауам итте...

* * *

Йәнлектәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтендәге аңлашыу мәсьәләһен башҡа осраҡта, әлеге лә баяғы, тәбиғәт үҙе көйләне. Ҡоралайҙар йәшәр өсөн үлән ашарға тейеш булған һымаҡ, бүреләргә йәнлек ите, ҡайнар ҡан кәрәк. Ҡоралайҙарҙы үлән ашауҙан, ағас ҡайыры кимереүҙән тыйып булмаған һымаҡ, ыржайҙарҙы ла тәғәйен ризығын ҡабул итеүҙән дүндереп булмай. Бына әле килеп ыржайҙарҙың ҡоралайҙарға ошо ташланыуы ла, ҡар-буран туҙҙырып уларға яҫҡыныуҙары ла тап шул ҡурсаулыҡ эсендә бара.

Өйөр башы, тиҫтә йәшен күптән тултырыуына ҡарамаҫтан, һаман да оло урмандың ҡоралайҙар атаманы һаналған Таштояҡ ҡурҡыныс килеүен белдереп, ҡаты тояғын ҡарҙан әрселгән туң ергә бер тапҡыр туҡылдата баҫып алды. Йәш сағында артынан ҡыуа килеүсе бер ыржайҙың башын яра тибеп үлтергәндән һуң уға йәбеште Таштояҡ ҡушаматы. Ҡушаматы ла, исеме лә - Таштояҡ. Өйөр башы фарман биреүе булды, аҡлан ситендә көҙҙән ҡалған үләнде утлаған, йығылған уҫаҡ ҡайыры кимергән ҡоралайҙар көтөүе ҡапыл ашауынан туҡтап, һындарын турайтып, башлыҡ ҡараған яҡҡа ҡарап хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡалды. Әйтерһең дә ошо мәл ваҡыт та туҡталды. Бары тик яҡындағы ағастарға ҡунған тумыртҡалар ғына үҙенең "туҡ-туҡ" эшен белде. Хәйер, тәбиғәттең һәр тере йән эйәһе тәүлек әйләнәһенә туҡланыу хәстәре менән йәшәй. Утлаған ҡоралайҙар ҙа, ҡорт эҙләгән тумыртҡалар ҙа, ҡоралайҙарға яҫҡынған ыржайҙар ҙа. Тумыртҡаларҙың "туҡ-туғына" ҡушылып, ҡоралайҙарҙың да йөрәктәре дөпөлдәп типте. "Дөп-дөп-дөп..." Тағы ла кемдәрҙеңдер йөрәктәре өлпөлдәй. Былары кем булыр һуң, сөнки был тирәлә ҡоралайҙарҙан һәм тумыртҡаларҙан башҡа йән эйәләре күренмәй бит. Көсөргәнеш тағы ла арта төштө. Таштояҡ тағы ла бер ҡат тояғын туң ергә һуғып алды. Көсөргәнеш тағы ла артты. Ҡоралайҙар Таштояҡтың икенсегә ерҙе төйөүен тик бер генә мәғәнәлә аңлай: спорт тренерының "Стартҡа!", "Иғтибар!", "Йүгерергә!" тигән фармандарына оҡшағайны был шартлы сигналдар. Барыһы ла өйөр башының хәрәкәтен түҙемһеҙләнеп көттө. Тап шул саҡта ҡар бураны араһында күренеп ҡалды ла инде уларға ташланған баяғы ыржайҙарҙың аҫҡа-өҫкә ташланған һындары. Ҡышҡы көн тыныс, елһеҙ ине, урмандың был урынындағы ел-дауылды ыржайҙар хасил итте.

Ошо көсөргәнешле мәлдән ун секунд ҡына алда ике йәшлек ҡыр кәзәһе Тертелдәк кимергән уҫаҡ ҡайыры әсе, әсе булһа ла, йөрәгенә ятып тора ине. Әммә уның әселеге бер секунд эсендә юҡҡа сығып, ҡоралайҙар көтөүенең дөйөм хәүеф алды кисереше менән алмашынды. Үндай мәлдә йәнлектәрҙең бар булмышы фәҡәт бер генә ынтылыш, бер генә хәҡиҡәтте ҡабул итергә әҙер: ыржайҙарҙың аҙауынан нисек ҡотолорға? Тертелдәк үҙе янындағы игеҙәге Тырт-Мырт менән бер үк хәрәкәттәрҙе ҡабатлап, тәүҙә ҡартаталары Таштояҡҡа ҡарап ҡатты, шулай ҡатып ҡалған килеш улар ҡараштарын берсә хәүеф көтөлгән яҡҡа, берсә әсәләре Инәккә, өйөр башлығы янында ғорур баҫып торған өләсәләре Һөтләкәйгә күсереп-күсереп алды. Һөтләкәй ҙә башын бора һалып, бер генә секундҡа яратҡан ейәнсәре Тертелдәккә ҡараш ташланы. Мыҡырҙаны. Уның кәзәләр теле менән әйткән һүҙҙәрен Тертелдәк бик асыҡ төшөндө. "Нимә генә булмаһын, минең арттан ҡалма. Йәйгеһен мин һинә ыржайҙарҙан нисек ҡасырға өйрәттем бит..." ти ине уға өләсәһе Һөтләкәй.

(Дауамы бар).

*✓ Әгәр ҙә кешенең маҡсаты бар икән, боҙоҡлоҡ юлына баҫмаҫ, яуызлыҡты, аламалыҡты урап үтер, тормошта үҙ юлын, үҙ урынын мотлаҡ табыр, ваҡытында ғаилә ҡорор, балалар үҫтерер, киләсәк тураһында уйлап эш итә белер.*



ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ

# ӨҘӨЛГӘН МӨХӘББӘТ,

## йәки борсаҡ ашы бәләһе



**Күптән түгел Өфө урамдарының берәһендә элекке танышымды осраттым. Йәш ваҡыттарҙы иҫкә алырҙай, һөйләшер һүҙҙәр күп кенә ине. Шуға күрәлер ҙә, урам буйлап гәпләшеп барып, байтаҡ ҡына ваҡыт йөрөп ташлағанбыҙ.**

- Был тирәлә туалет юҡмы икән? - тине танышым бер мәл.

Хәҙерге Өфөнө бөтөнләйгә тиерлек белмәгәс, мин яурындырымды йыйырҙым. Үткән-һүткән кешеләрҙән һораштырабыҙ. Әммә берәһе лә яҡын-тирәлә бәҙрәф барлығын-юҡлығын белмәй, әйтерһең дә, барыһы лы беҙҙең һымаҡ ситтән килгән...

Эҙләнеп йөрөй торғас, тимер ҡойма менән уратып алынған бер төҙөлөш майҙанына килеп индек. Бейек йорт төҙөп яталар икән. Бәхеткә, урамында төҙөүселәр өсөн таҡтанан яһалған бәҙрәфтәре лә бар...

- Өфөгә ғүмеремдә тәү килгән осорҙағы, бынан ҡырҡ йылдар элек булған бер ваҡиға иҫкә төштө, шуны һәйләйем әле, - тине танышым күңеле күтәрелеп. - Иғтибар менән тыңла. "Киске Өфө" гәзитендә "Өфөләргә барам әле" тигән конкурс иғлан иткәндәр бит. Һин, яҙыусы кеше, минең иң яратып уҡыған гәзитемә хәҙер мин һөйләйәсәк истуриямды яҙып ебәр әле, түлке исемемде күрһәтеп ҡуйма.

Унынсы синыфты тамамлап, институтҡа имтихандарға әҙерләнеп йөрөйөм. Шунда уҡып йөрөгән яҡташ студенттарҙан шәмбе һайын йәштәр Салауат Юлаев һәйкәленә барып, "пятачок" ойошторалар икән, тип ишеттем. Гармунға, бейеүгә әүәҫ кеше булараҡ, кискә бер иптәшемде эйәртеп, һәйкәл янына киттем. Һәр район йәштәре бер түңәрәккә йыйылышып, гармун, ҡурайға бейешәләр ине. Һорашып, үҙебеҙҙең райондыҡылырҙы ла табып алдыҡ. Бер яҡ күршелә генә әбйәлилдәр гөр килә, икенсе яғыбыҙҙа - хәйбуллалар. Оҙаҡламай, барса төркөмдәрҙең аралашып киткәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ.

Баянсы "Яңғыҙ томбойоҡ"то үҙәккә үтерҙәй итеп һыҙҙырып ебәргәс, заманына күрә матур ғына кейенгән егеттәр шулай уҡ байрамса тиерлек биҙәнеп-яһанып килгән ҡыҙҙарҙы вальсҡа саҡырып, бейергә алып төшә башланы. Минең күҙҙәрем баяраҡ Әбйәлил төркөмөндә күрә биреп ҡалған бер сибәр генә ҡыҙға төштө. Ысынлап та, "ҡалаҡҡа һал да йот" инде. Зифа буйлы, йәтешерәк кәүҙәһенә ифрат та килешеп торған йоҡа, матур алһыу ебәк күлдәктәге был ҡыҙҙың матурлығына һөйөнөп, бер аҙ ҡарап торҙом. Шундайын да һылыу йөҙлө ҡыҙҙар тик әкиәттәрҙә генә булалыр, тип уйлаһам... Юҡ, юҡ! Бына ул минең күҙ алдымда. Сөм-ҡара оҙон, беләктәй ҡалын толомдарын үреп, ике яҡтан түштәре буйлатып төшөргән. Буялмаған, тәбиғи ҡыйғас ҡаштары һауала осоп уйнаған ҡарлуғас ҡанаттарылай ҡыйылып, унын айҙай һылыу йөҙөн биҙәй. Матур булып бөгөлөп торған оҙон керпектәрен һирпеп, тулышып бешкән ҡарағаттай сөм-ҡара күҙҙәре менән һирәкләп минең яғыма ла ҡарап алғандай була был сибәркәй. Бер ҡарауҙа ғишыҡ итерлек, күңелде арбап алырҙай тылсымлы ҡараш...

Ауыҙыңды асып, артыҡ оҙаҡ ҡарап тороп, һемәйеп тә ҡалыуың бар. Ни булһа ла булыр, тип, башҡа берәй егет эләктереп алмаҫ борон тәүәккәлләп, ҡыҙҙы бейеүгә саҡырҙым. Бәхеткә, ул ҡаршылашманы. Бер ҡулымды унын нескә биленән һаҡ ҡына уратып, икенсеһе менән унын эҫе генә тойолған усынан тотоп, сихри күҙҙәренән ҡарашымды ала алмайынса, матур көйгә әкрен генә әйләнә башланыҡ.

Минең һымаҡ уҡ юғары уҡыу йортона имтихан тапшырып йөрөгән был Әбйәлил һылыуҡайы менән һүҙҙәребеҙ тиҙ беректе. "Пятачок"-тан башҡаларҙан иртәрәк киттек. Күптәнге таныштарҙай һөйләшә-һөйләшә, матур Өфө урамдары буйлап йөрөп, нисек ҡараңғы төшкәнен дә һиҙмәй ҡалғанбыҙ. Үҙ ғүмеремдә беренсе мәртәбә шундай матур ҡыҙҙың биленән тотоп барыу бәхетенә ирешеп, үҙенде күктең етенсе ҡатында һымаҡ тойоп барыуҙары ни тора бит әле!.. Тик...

Алдараҡ әйтергә онотҡанмын. Пятачокка барыр алдынан ғына Фрунзе урамындағы ашханаға инеп, ул саҡтағы ифрат та арзан булған борсаҡ ашын ике порция алып ашап алғайным... Бер заман тәҡәтһеҙ эсем күбә башламаһынмы! Түҙеп кенә тор! Ә янында хур ҡыҙындай сибәрең. Ни хәл итергә? Бер ергә барып килергә кәрәк, тип әйтергә лә уңайһыҙланам бит әле. Яңылыш ҡына ҡағылып, гәлсәр һауытты ватып ҡуйырға ҡурҡҡандай, нисек кенә итеп әйтһәм дә, был һылыуҡайҙы үпкәләтеп ҡуйырмын, тип шикләнеүемә хәҙер ышанғы ла килмәй. Әммә йәш ваҡыттың тап ана шундай мәлдәре булалыр инде, күрәһең.

Бәхеткәме, түгелме, уныһын һуңыраҡ үҙең төшөнөрһөң, иллә мәгәр мине ошо сетерекле хәлдән Ғәзимә (исеме үҙгәртеп алынды) үҙе үк ҡотҡарҙы. "Әйҙә, ошо өйгә инеп сығайыҡ, - тине ул бер заман туғыҙ ҡатлы йортҡа күрһәтеп. - Апайымдар ошонда йәшәй..." Минең нисек шатланғанымды белһәң икән! Тик хужалар өйҙә генә булһын. Бәҙрәфтәре лә барҙыр, моғайын...

Асҡыс та биреп ҡуйған икән апаһы Ғәзимәгә. Һигеҙенсе ҡаттағы ике бүлмәле фатирҙың ишеген үҙе асты. Өйҙә дөм-ҡараңғы, бер кем дә юҡ, ахыры. Ишек төбөндәге тоноҡ ҡына утты яндырҙы ла Ғәзимәм, бер ни ҙә өндәшмәҫтән, йәһәтләп... туалетҡа инеп китте. Был ваҡытҡа инде минең түҙер хәлем ҡалмағайны. Ҡыҙҙың сыҡҡанын көтөп торор әмәл бөттө! Эсемдәге "күк күкрәүҙәр" сығырымдан сығарҙы. Тәҡәтһеҙҙән, утты ла яндырып тормайынса, йоҡо бүлмәһенә үттем. Артымдан ишекте ябыуым булды, ошоғаса йыйылып килгән барлыҡ проблемаларым шау-гөр килеп, үҙенән-үҙе хәл ителде. Күңелгә шундай рәхәт булып ҡалды! Тик тәҙрәне асып, бүлмәнең һауаһын алыштыраһы ғына бар... Пинжәкте сисеп, тырыша-тырыша елпетә торғас, бүлмәлә саф һауа урынлашыу менән, ҡараңғыға бер аҙ күҙҙәр ҙә өйрәнә башланы. Төптәрәк торған диванмы, карауатмы, күҙгә салынды. Ә унда... әллә аптыранышып, әллә ҡурҡышып ултырған ир менән ҡатынды байҡап ҡалдым. Апаһы менән еҙнәһе!.. Бөттө баш! Бөттө һөйөү...

Фатирҙан нисек сығып ҡасҡанымды хәтерләмәйем, тиерлек. Бәхеткә, Ғәзимәм туалеттан әле лә сыҡмағайны...

Шул ваҡыттан алып ул сибәрҙе бер ҡасан да осратҡаным булманы. Университетҡа имтихан биреп йөрөгән һылыуҙарҙан һылыу Ғәзимәм менән артабан бәйләнеш тоторға яҙмағандыр, күрәһең. Апаһы менән еҙнәһе ҡурҡа-ҡурҡа үҙҙәренең ни күргәндәрен уға нисегерәк итеп һөйләп биргәнен күҙ алдына килтереп, берсә көлгө, берсә илағы килә, - тип тамамланы һүҙен танышым...

Ә Өфө урамдарында бәҙрәф тапмаһағыҙ, ҡәҙерле яҡташтар, лутсы берәй төҙөлөш барған урын эҙләгеҙ. Унда төҙөүселәр үҙҙәре өсөн әбизәтелне бәҙрәф яһап ҡуя. Баш ҡалабыҙҙа һуңғы осорҙа төҙөлөш мәсьәләһе, бәхеткә, ифрат та әүҙем хәл ителә бит...

**Зәбих ҠЫУАНДЫҠОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ОЛО МАҠСАТЛЫ БУЛАЙЫҠ -

## ул оло эштәргә килтерер

**Рәшит ШӘКҮР, шағир, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор, БР-ҙың С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, М. Аҡмулла, Рәми Ғарипов, Зәйнәб Биишева исемендәге премиялар лауреаты:** Әйтер һүҙем - маҡсатлы булыу, тормошта үҙ алдыңа оло маҡсаттар ҡуйып йәшәү тураһында. Маҡсатҡа ынтылыу кешелә үҙ-үҙенә ышаныу көсөн арттыра, ауырлыҡтарҙы, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу юлдарын табырға булышлыҡ итә. Йәһүдтәр иһә, һәр кемгә тормош юлын алдан уҡ планлаштырырға кәңәш бирә. Был иһә йәһүдтәрҙең донъяға киң билдәле бизнес элитаһының алтын ҡағиҙәләренең береһе иҫәпләнә. Йәштән планлаштыра белеү беҙҙең халыҡта ла булыуын булған ул, ләкин ундай оло аҡыл барыбер ҙә һирәгерәк күренеш инде ул. Үҙ алдына оло маҡсаттар ҡуйып йәшәгән йәштәребеҙҙең әлдән-әле ҙур уңыштарға өлгәшеүе халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн өмөт, ышаныс тойғоһо тыуҙыра. Милләтте унын арҙаҡлы шәхестәре күтәрә. Күп ваҡыт хатта, бер кешегә ҡарап, бүтән халыҡ вәкилдәренең, башҡорттар бына ниндәй икән дә ул, тип һоҡланған, беҙгә ихтирам менән ҡарағандарын үҙ күҙҙәрем менән күргәнем булды. Заманында Силәбелә йәшәгән бөйөк көрәшсе һәм көрәш буйынса атаҡлы тренер Харис Монасип улы Йосопов менән аралашыу насип булды. Ҡалала уны, олоloҡлап, "Папа Ю" тип кенә йөрөтәләр ине. Унын алдында башҡорттар менән бергә урыҫ, тажик егеттәренең дә өлтөрәп кенә йөрөгәне хәтерҙә ҡалған. Һәр хәлдә, ҡалала ул иң абруйлы кеше ине булһа кәрәк. Ниндәй оло маҡсаттар ҡуйып, үҙенең дә, халҡының да исемен юғары күтәреп йәшәне Харис ағай.

Силәбе башҡорттары араһынан әлеге көндә Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин, бокс буйынса донъя чемпионы Денис Шафиҡов, бокс буйынса АҠШ-тың Нью-Йорк ҡалаһы чемпиондары, игеҙәктәр - донъяның иң көслө 15 боксеры исемлегенә ингән Хәбир (боксты WBO NABO төрө буйынса Төньяҡ Америка чемпионы, кикбоксинг буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы) һәм Сабир Сөләймәновтар үҙҙәренең хәләл көстәре менән Харис ағайҙың юлын дауам итәләр. Оло рухлы кешеләр, ысын патриоттар улар.

Шәхес ҙурлығы - Хоҙай Тәғәлә биргән көстөң, таланттың ҡәҙерен белеп, унын бөртөгөн дә әрәм-шәрәм итмәйенсә, илең, халҡың яҙмышы хаҡына ерҙә изгелек өсөн хеҙмәт итеүҙәлер ул. Әгәр ҙә кешенең маҡсаты бар икән, ул эскелек, боҙоҡлоҡ юлына баҫмаҫ, яуызлыҡты, аламалыҡты урап үтер, тормошта үҙ юлын, үҙ урынын мотлаҡ табыр, ваҡытында ғаилә ҡорор, балалар үҫтерер, киләсәк тураһында уйлап эш итә белер. Динебеҙ, телебеҙ, рухиәтебеҙ яҙмышы өсөн барған көрәштә яңылыш юлға баҫмаҫ, аҡты ҡаранан айыра белер. Шул айҡанлы йәштәребеҙгә ихлас күңелемдән киҫәтеп әйткем килә: күпләп дин юлына аяҡ баҫаһығыҙ, уныһы яҡшы, ләкин төрлө секталарҙың тоҙағына эләгә күрмәгеҙ. Улар - беҙҙең халыҡ өсөн үтә хәүефле, зарарлы күренеш. Халҡыбыҙ мең йыл буйы инанып йәшәгән, Зәйнулла Рәсүлевтан, Аҡмуллаларҙан ҡалған илаһи Ислам диненә, Ҡөрьән һүҙенә инанып йәшәйек. Әгәр ҙә телебеҙҙе, рухиәтебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡларға тырышабыҙ икән, быны Конституция, илебеҙҙә ҡабул ителгән ҡанундар менән билдәләнгән хоҡуҡтарға таянып эш итергә тейешбеҙ.

Халыҡтың киләсәге -уҡыған, белемле, һөнәрле йәштәр ҡулында. Шөкөр, йәштәребеҙ уҡыуға, белемгә ынтыла. Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарында уҡып йөрөүселәр һаны күҙгә күренеп артты. Тик шуны онотмайыҡ: уҡып-уҡып та, ситтә тороп ҡалһалар, быныҙ беҙҙең өсөн ҡыуанысы ҙур булмаҫ. Айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре быуыр, тип әйтерлек булмаһын ине. Һеҙ ситтә тороп ҡалһағыҙ, республиканы кем яҡлар, кем һаҡлар? Халҡыбыҙ ғүмер буйы үҙ еренә - үҙенең Уралҡайына һыйынып, шунда тупланып йәшәгән. Артабан да үҙ еребеҙҙең ҡәҙерен белеп, берҙәм халыҡ булып йәшәргә кәрәк беҙгә. Һәммәбеҙҙе лә бер үк уй, бер үк хыял, Башҡортостаныбыҙҙың, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн хәстәрлек тойғоһо берләштереп торһон, туғандар!

ИНТЕРНЕТТАН



# ТАҒЫ БЕР МИФ...

## ҡатын-ҡыҙ интуицияһы

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100В матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

■ Белгестәр иҫкәртә, хәрәкәт иткәндә даими рәүештә телефон ҡулланыу умыртҡа бағанаһының кәкерәйеүенә алып килә. Америка ғалимдары үткәргән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, заман гаджеттарын әүҙем ҡулланыусылар умыртҡа бағанаһына зыян итеүе бар. Эксперимент барышында унда ҡатнашыусыларға бер юлы өс төрлө эш менән булышырға: билдәле бер траектория буйлап атларға, телефондағы смс хәбәрҙәрҙе уҡырға һәм уларға яуап бирергә тәҡдим ителгән. Әммә был мәсьәләләрҙе барыһы ла үтәй алмаған. Гаджет ҡулланыусылары яйыраҡ һәм эйелеберәк атлаған, ҡайҙа барғандарын контролдә тотоу өсөн, улар һәр ваҡыт баштарын борғоларға мәжбүр булған. Ғалимдар раҫлауынса, кешенең үҙе өсөн һиҙелерлек булмаған был үҙгәреште вестибуляр аппаратҡа һәм умыртҡа бағанаһына тәьҫир итә. Бынан тыш, иғтибар ситкә йүнәлтелгән булыуы сәбәпле, улар үҙҙәренең хәүефһеҙлеге тураһында ла уйланмай.

■ Ҡатын-ҡыҙ интуицияһы - ул кешелек йәмғиәте тарафынан уйлап табылған миф, ти Хартфордшир университеты (Бөйөк Британия) ғалимдары. Ғалимдар 15 мең кеше ҡатнашлығында эксперимент үткәргән. Улар фотолағҙағы кешеләрҙең ҡайһыһы ихлас, ә ҡайһыһы яһалма йылмайғанын асыҡларға тейеш булған. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 80, ир-аттарҙың 58 проценты үҙҙәренең яҡшы интуицияға эйә булыуы тураһында белдерә. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ике енес араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, һорауға ир-аттарҙың - 72, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 71 проценты дөрөҫ яуап биргән. Ғалимдар иҫәпләүенсә, интуиция нигеҙендә белем кимәле ята. Ирҙәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың биологик айырмаһы гормональ һәм репродуктив системала булған айырмалыҡтарға бәйле, ә бына улар араһында когнетив айырмалыҡтар бөтөнләй юҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, кешенең интуицияһы уның аҡылы һәм мәҙәни кимәленән тора, тип белдерә ғалимдар. Профессор Робин Хогарт фекеренсә, ҡатын-ҡыҙҙар һиҙгерерәк, шуға ла уларҙың фекер йөрөтөүе йышыраҡ осраҡта дөрөҫкә сыға. - Кешелек барлыҡҡа килгәндән алып, ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырыу, уларҙың бер-береһенән өҫтөнлөктәрен эҙләү модаға ингән, әммә был айырмалыҡтар ул тиклем ҙур ҙа түгел. Беҙҙең мәҙәниәттән дөрөҫ булмаған факттарҙы алып ташлау кәрәк, - ти Лондон университеты ғалимы Альберт Барке.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЙОҒОШЛО АУЫРЫУҘАР МӘКЕРЕН...

## кешелектең еңә алыуы икеле



**Кеше, моғайын да, Аллаһы Тәғәләнең иң камил йән эйәһелер. Сөнки уға аң һәм тел бирелгән. Ләкин ҡайһы саҡта кеше генә үҙенә бирелгән ошо бүләкте шөкөр итеп ҡабул итеп, ғүмер буйы шул камиллығын һаҡлау урынына, үҙенә ҡарата иң битараф йәнгә әйләнә. Донъя артынан ҡыуып, хатта йылына бер тапҡыр ғына түгел, тиҫтә йылдар буйы табипҡа күренеп, организмына профилактика үткәрергә лә онота. Ә камил механизм кеүек эшләгән организм үҙенә иғтибар кәрәклеген даими һиҙҙертеп тора: йә тегенән ауырта, йә бынан сәнсеп ала һ.б. Ләкин кеше тиғән аҡыллы йән эйәһе үҙен ҡаһармандарса тота һәм һуңғы сиккә еткәнсе, сирҙәре аҙғансы тыныс ҡына йөрөй бирә. Әммә ваҡытында сара күргәндә, үҙ организмың менән килешеп йәшәргә мөмкин, тип раҫлай бөгөнгө ҡунағыбыҙ, медицина фәндәре докторы, профессор, микробиолог, иммунолог Марсель Марат улы ТОЙҒОНОВ сәләмәтлек серҙәре менән бүлешеп. Шулай итеп, һүҙ - врач-микробиологҡа.**

**➔ Медицина микробиологияһы - ул күҙгә күренмәгән, кешелә инфекция ауырыуҙары тыуҙырған тереклекте, микроорганизмдарҙы (бактерияларҙы, үнәҙҙәрҙе, вирустарҙы) өйрәнеүсе фән икәнен сырамытабыҙ. Ә шулай ҙа медицина микробиологияһы тураһында ентеклерәк һөйләп үтегеҙ әле.**

- Статистика мәғлүмәттәре буйынса, бөгөн Рәсәйҙә үлемгә килтерә торған ауырыуҙарҙан беренсе урында йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре тора. Икенсе урында - яман шеш, өсөнсө урында - йоғошло (инфекцион) ауырыуҙар. Мәҫәлән, бауыр яман шешен алһаҡ, уның сәбәпсеһе булып В гепатиты торорға мөмкин. Кеше ҡасандыр гепатит менән зарарланған, белмәй йәки белһә лә дауаланмай йөрөгән һәм уның ахыр сиктә яман шешкә әйләнеүе ихтимал. Әлбиттә, леталь осраҡтан һуң, ул кеше яман шештән үлде, тиҙәр. Ысынбарлыҡта, тәүсәбәп булып В, С гепатитының вирус инфекцияһы тора. Йәки ашҡаҙан ауырыуҙарын алайыҡ. Был сирҙең төп сәбәпсеһе - организмдағы хеликобактер пилори тигән микроорганизм. Уны 1979 йылда Австралия патологы Робином Уорреном аса һәм 1981 йылда Барри Маршалл менән берлектә артабан тикшеренеүҙәрен дауам итә. 2005 йылда улар медицина буйынса Нобель премияһына лайыҡ булды. Хеликобактер пилориҙың шундай үҙенсәлеге бар: ул цитотоксин эшләп сығара һәм, ваҡытында дауаламағанда, ул ике-өс йыл эсендә ашҡаҙан яман шешенә әйләнеп китеүе ихтимал. Әлбиттә, был сирлене лә, үлгәндән һуң, яман шештән үлде, тип теркәйәсәктәр. Ә тәүсәбәп - микроорганизмда.

Элек беҙҙә, ашҡаҙандың сей яраһы (язва) нервылар ҡуҙғыуынан килеп сыға, тип уҡыта торғайнылар. Сөнки ул ваҡытта был сирҙе тыуҙырыусы микроорганизмдар тураһында мәғлүмәт булманы. Шул сәбәпле ашҡаҙанында, эсәктәрендә сей яра булған сирлеләр һәр саҡ хирургия юлы менән дауаланды, йәғни ағзаһын ниндәйҙер өлөшө - яртыһымы, тулыһынсамы - ҡырҡып алынды. Операциялар Бильрот-1, Бильрот-2 тип аталды. Элек Республиканың клиник дауаханаларында операция бүлмәләрендә (травматологияны һәм нейрохирургияны иҫәпкә алмағанда) көн һайын ошо ике төр операция ғына яһалды. Ә инде был сирҙәрҙе тыуҙырыусы бактерияны, микробтарҙы табып, уның үҙенсәлектәрен өйрәнгәс, табиптар уны былай ҙа дауалап була икәнен аңланы. Бөгөнгө көндә Бильрот-1, Бильрот-2 операциялары хеликобактер арҡаһында бөтөнләй эшләнмәй. Дауалау учреждениелары өсөн күпме экономия! Унан һуң, ашҡаҙанын алып ташлаһаң, кеше лә камил, тулы һанлы булмай бит инде. Ә бөгөн сей яраны дарыуҙар менән дауалайҙар һәм дөрөҫ дауалау курсы үткәрһәң, сирле тулыһынса - 100 процентҡа һауыға. Әлбиттә, уның ҡабаттан зарарланыуы ла мөмкин, сөнки уның иммунитеты ҡаҡшаған була, әммә үҙ һаулығына битараф булмағанда, сәләмәтлегенде оҙаҡ йылдарға һаҡларға мөмкин.

Бөгөнгө хәл-тороштан сығып ҡарағанда, кеше лә, микробтар ҙа параллель рәүештә эволюцион үҫеш кисерә. Әлбиттә, микробтарға ҡаршы яңы технологиялар, яңы дарыуҙар, антибиотиктар уйлап табабыҙ. Микроорганизмдар ҙа шулай уҡ ҡаршы тороу механизмдарын камиллаштырып, үҙҙәре өсөн "үлемесле" препараттарға ҡаршы тороу һәләтенә эйә була бара. Мәҫәлән, - туберкулез таяҡсалары. Уның бөгөн бер ниндәй ҙә антибиотик тәьҫиренә бирешмәгән штаммдары бар. Шуға ла, әгәр йәмәғәт транспортында осраҡлы ғына рәүештә туберкулездың асыҡ формаһын йөрөтөүсе берәйһе менән аралашып, зарарланһаң, ул артабан инфекцияға әйләнеп, аҙағы ҡыҙғаныс тамамланыуы ла мөмкин. Йәки бына герпес, тибеҙ. Бер тапҡыр зарарланһаң, уның вирустары ғүмер буйына организмда ҡала һәм ваҡыты-ваҡыты менән үҙен һиҙҙереп, сығып тора. ВИЧ-инфекцияны алһаҡ та, бөгөн уға ҡаршы дарыу юҡ. Ә был инфекция беҙҙең иммун системаһының төп күҙәнәктәрен ашай. Иммунитеты булмағас, кеше ябай ғына тымауҙан да үлеп ҡалыуы ихтимал. Ғөмүмән, инфекцион ауырыуҙар бик мәкерле һәм кешелек уны бер ваҡытта ла еңә алмаясаҡ. Шуға микробиологияла ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙы өйрәнеү, асыҡлау буласаҡ табиптар өсөн көнүҙәк бурыс булып тора.

**➔ Пенициллинды тап микробиологтар, атап әйткәндә, 1929 йылда А. Флеминг уйлап тапҡан, ә хәҙерге ваҡытта хатта табиптарҙың ҡайһы берҙәре антибиотиктарҙы ҡулланмаҫҡа өндәй, сөнки уларҙың организмға кире йоғонтоһонан башҡа ыңғай тәьҫире юҡ, тип дәлилләй. Шул уҡ ваҡытта, әйтеп китеүегеҙсә, ҡайһы бер осраҡта тап антибиотиктар ҡулланып, ауырыуҙарҙы аҙҙырмай, ваҡытында һөҙөмтәле сара күрергә мөмкин. Утһыҙ төтөн булмай, тигәндәй, былай ике төрлө ҡараштың да нигеҙе барҙыр бит?**

- Бөгөн Рәсәйҙә генә антибиотиктарға ҡаршы кире ҡараш формалаша бара. Мин бының сәбәбен ҡулланыусы этикаһы юҡлығында һәм фарминдустрия эшләп сығарған дарыуҙарға дәүләт тарафынан контроль булмауында күрәм. Рәсәйҙә аптекаға инеп, төрлө антибиотикты рецепт булмаһа ла һатып алырға мөмкин. Ә сит илдә уларҙы ирекле рәүештә һатыу бөтөнләй тыйыла. Антибиотиктарҙы бары тик табип тәғәйенләй һәм ул рецепт нигеҙендә генә һатыла.

Икенсе яҡтан, "сарафан радиоһы" бик шәп эшләй беҙҙә. Кемдер ниндәйҙер антибиотик ҡулланып дауаланыуын, уға ныҡ килешеүен кемгәләр һөйләһә, был хәбәр тиҙ генә таралып, барыһы ла шул антибиотик менән дауалана башлай. Әгәр антибиотикты табип тәғәйенләүенән тыш, күпләп ҡулланһаң, организмда уға күнегеү барлыҡҡа килә. Шуға ла мин студенттарға ла: "Моғайын, микроорганизмдарҙың дарыуҙарға бирешмәгән штаммдары Рәсәйҙә барлыҡҡа киләләр", - тим. "Ниңә?" тип һорайҙар. Сөнки тап беҙҙә дарыуҙарҙы табип тәғәйенләүенән тыш, организмдың уларға һиҙгерлеген тикшереп тормайынса, бер контролһеҙ ҡулланыу киң таралған. Аптекалағы фармацевт "диагнозы" буйынса, иң һуңғы, спектр тәьҫире юғары булған антибиотикты һатып алалар ҙа, үҙ аллы дауаланырға керешәләр. Һөҙөмтәлә бактерияларҙың бер ниндәй дауалауға ла, антибиотикка ла бирешмәгән штаммы барлыҡҡа килә. Ғәмәлдә иһә, организмдағы микроорганизмдарҙың барыһында ла ошо антибиотик тураһында мәғлүмәт һаҡланып ҡала. Микробтар ҙа үҙ-ара аралаша, мәғлүмәт тапшыра бит. Улар файҙалы мәғлүмәтте үҙендә һаҡлап ҡала һәм телэгән ваҡытта уны организмдың һаҡлаусы иммун системаһына ҡаршы ҡуллана ала. Был йәһәттән бигерәк тә шартлы-патоген микробтар мәкерле. Улар бер осраҡта нормаль микроорганизм булып иҫәпләнә, әммә организмдың иммунитеты төшөп китһә, шунда уҡ патоген микробҡа әүерелеүҙәре мөмкин.

**➔ Аллаһы Тәғәлә һәр ауырыуға дауаһын да биргән, тиҙәр. Бында, әлбиттә, тәбиғи дауа күҙ уңында тотола. Рәсми медицинаға альтернатива булған халыҡ медицинаһына ҡарашығыҙ нисек?**

- Әлбиттә, ыңғай. Мәҫәлән, бал ҡорто продукттарынан эшләнгән инә ҡорт һөтө, ҡорт елеме бик көслө антибактериаль препараттар. Шулай уҡ төрлө үләндәр бар. Ләкин уларҙы ла белеп ҡулланырға кәрәк. Бына, әйтәйек, би-

отехнологиялар буйынса патоген микробтарҙы (мәсәлән, сальмонелла, стафилококк, стрептококк, протей һ.б) фагтар, йәғни вирус-бактериялар менән дауаларға мөмкин. Һәр бер микробтың үҙенең фагы була. Юҡҡа ғына, минең дошманымдың дошманы минең дусым, тимәйҙәр бит. Шул күҙлектән ҡарағанда, был микробтың вирустары кеше өсөн дауа булып тора. Ошо бактерияфагтарҙы бүлеп сығарып, микробтарға ҡаршы ҡулланғанда, улар, антибиотиктар кеүек, кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә үлтермәй, ә снайпер кеүек һайлап ҡына сәпкә тейҙерәләр. Әгәр микробтың эсенә бер фаг-вирус инһә, 20-30 минуттан ул 300-500 булып килеп сыға һәм шунса уҡ микробты юҡ итә. Организмда микробтар бөтһә, вирустар ҙа улар менән бергә сығып китә. Шуға күрә бөгөн яйлап ҡына ошо йүнәлештә эш алып барабыҙ. Әлбиттә, уның нескәлектәре бик күп. Әммә фагтар буйынса шундай база-банк эшләп алһаҡ, бәлки, аллергия менән интеккән, бөйөр-бауыр эшмәкәрлеге насар булған балаларҙы, ҡайһы бер сирҙәрҙе ошо фагтар менән генә дауалау мөмкин булыр.

➔ **Вирустар, бактериялар барлыҡҡа килә лә, уларға ҡаршы вакцина эшләп сығарһың, уны ҡулланыуға тәҡдим иткәнсе мутацияға бирелеп, икенсе штаммға әйләнәләр, тиҙәр...**

- Был бигерәк тә киҙеүгә ҡағыла. Уның геномикаһы шундай - тиҙ мутацияланa. Вакцина ярҙамында идара итеп булған ауырыуҙарҙың тотош бер йүнәлеше бар. Ул бигерәк тә балалар ауырыуҙарын - ҡыҙылса, быума йүтәл, ҡыҙамыҡ, дифтерия һ.б. - үҙ эсенә ала. Уларҙың таралыуын, нигеҙҙә, вакцина ярҙамында тотоп киләбеҙ. Киҙеүгә ҡаршы ла шундай йүнәлеш алып барыла. Барыһын да мәжбүри вакцинацияларға теләгәйнеләр ҙә, был, әлбиттә, дөрөҫ түгел. Сөнки киҙеүҙең бер миҙгел эсендә 5-6 штаммы бергә ҡушылырға мөмкин. Ә вакцина бит уның бер штаммын ғына дауаларға мөмкин. Шуға күрә, бик йыш, вакцинаның һөҙөмтәһе булманы, тигән һүҙҙәр ишетергә тура килә. Дөрөҫөрәге, вакцина бары тик бер штаммға ғына йүнәлтелгән һәм башҡа төркөмдәргә уның һөҙөмтәһе юҡ.

➔ **Организмында күҙгә күренмәгән микроорганизмдарға, гөмүмән, барлыҡ сирҙәргә ҡаршы торорлоҡ иммунитет булһын өсөн кеше нимә эшләргә тейеш?**

- Иммун системаһы - ул организмдың тотош системаһы. Уның күҙәнәктәре һәр бер ағзала, һәр бер туҡымала бар. Улар барыһы бергә тотош системаны барлыҡҡа килтерә. Уны һаҡлау өсөн, әлбиттә, тәү сиратта, дөрөҫ туҡланырға, эсеү, тәмәке тартыу кеүек насар ғәҙәттәрҙән арынырға, витаминдар ҡабул итеп торорға кәрәк. Эсәктәге микробтар һәр саҡ иммун системаһын стимуллап тора, шуның өсөн эсәктәр яҡшы эшләргә тейеш. Физик, сынығыу күнегеүҙәре, бассейн, йөҙөү, саф һауа, саңғыла шыуыу, йүгереү кеүек саралар иммун системаһын, әлбиттә, көслө тота.

➔ **Һуңғы йылдарҙа БАД-тарға (биологик актив ҡушылмалар) иғтибар артты. Улар дарыуҙан нимәһе менән айырыла һәм уларҙы ҡулланыу мотлаҡ кәрәкме?**

- Дарыу препараты клиник һынау үтә, оҙон-оҙаҡ йылдар өйрәнелә, фармкомиттеттан уны файҙаланыуға рөхсәт алына. БАД - ул биологик актив ҡушылма һәм уның һынау үтмәүе лә ихтимал. Һөҙөмтә, әлбиттә, икеһенең дә бер үк булыуы мөмкин. Әммә уларҙы дарыуға әйләндереү өсөн бер кешенең ғүмере етмәй: күп һынауҙар үткәрергә кәрәк. Шуға күп фармпредприятиелар, ошо этаптарҙы үтмәҫ өсөн, дарыуҙарын БАД тип тә һатыуға сығара. Әлбиттә, дарыуҙарҙың да, БАД-тарҙың да файҙалылары ла, файҙаһыҙҙары ла бар. Әммә файҙаһы тейә икән, ни өсөн ҡулланмаҫҡа?

➔ **Дарыуҙар клиник һынау үтә, тинегеҙ. Әммә ул һынауҙар лаборатор хайуандарҙа үткәрелә. Һуңғы продукт кешегә тәғәйенләнә. Һынауҙы хайуандарҙа үткәреп, кешегә тәғәйенләү нимәгә нигеҙләнә?**

- Әлбиттә, кеше организмы менән хайуан организмы бер үк түгел, әммә системалар: бөйөр, бауыр һ.б. бер үк эшләй. Кеше организмы, әлбиттә, ҡатмарлыраҡ. Әммә бөгөнгө көндә препараттарға һынау үткәреүҙең башҡа ысулы юҡ. Шуға теге йәки был препарат лаборатор хайуандарҙа хроник һиҙгерлеккә, ағыулылыҡҡа, системаның төрлө ағзаларына тәьҫире буйынса һынауҙар үтә. Әгәр системаға зарар килмәһә, кешелә һынарға рөхсәт алына. Шуныһы үкенесле, Рәсәйгә күп кенә сит ил дарыуҙары килеп инә. Баҡтиһәң, уларҙы донъяның өсөнсө илдәре ебәрә икән. Йәғни, ҡайһы бер препараттарҙы өндәшмәйнитмәй генә Рәсәй кешеләрендә һынап ҡарайҙар, имеш. Рәсәй кешеләре лаборатор хайуандарҙы алмаштыра булып килеп сыға. Был үҙе үк ҙур енәйәт булып тора, әммә уны асыуы бик ауыр. Ә сит илдәрҙә һынау кешелә үткәрелә икән, шәхсән уның менән килешеү төҙөп, күпмелер аҡса түләйҙәр. Әгәр ҙә ниндәйҙер өҙләгөү булһа, ҙур күләмдә компенсация түләнә.

Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк: бер үк атамалы препараттарҙы сит илдә алһаң, уның тәьҫире шул тиклем көслө, ә беҙҙәгеләр бөтөнләй тәьҫир итмәй. Баҡтиһәң, илдә ялған дарыуҙар эшләү киң күләмдә бара икән. Әйтеп китеүемсә, Рәсәйҙә фарминдустрия, нигеҙҙә, аҡса эшләүгә ҡоролған, сифат, һөҙөмтәлелек буйынса контроль юҡ. Тағы шул яғы бар, күп дарыуҙарҙың ҡабына Рәсәй компаниялары етештереүсе тип яҙыла. Ысынбарлыкта иһә, уларҙың эсендәге дарыу сит илдеке, нигеҙҙә, Һиндостандыҡы булып сыға. Сөнки уларҙа биотехнологиялар ныҡ үҫешкән. Шуға унда етештерелгән, тәьҫир көсө ныҡ булған эслектәрҙе (начинка) ҙурҙур мискәләргә тултырып, төрлө илдәргә ебәрәләр. Урындарҙа мискәләрҙе асып, ҡаптарға тултырып ҡына сығалар. Әммә эслек бер үк, ләкин ҡайҙалыр уның һөҙөмтәһе юғары, ҡайҙалыр - түбән, ҡайҙалыр бөтөнләй ағыулы булыуы ихтимал. Был иһә етештереүселәр намыҫында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеүҙе йомғаҡлап, ниндәй һығымталар яһарға мөмкин: дауаланыуға ҡарағанда, һау-сәләмәт булыу арзанға төшә, шуға һаулыҡты һаҡларға кәрәк. Һаулығы булмағандар быны ныҡ аңлай һәм булған ғына сәләмәтлеген ныҡ ҡәҙерләй, даими тикшерелеп тора. Ә кемдең һаулығы бар, ул ғүмер буйы шулай булырына ышанып, ҡайһы берҙә юҡ ҡына сирҙәрен дә аҙҙырып ебәрә. Шуға күрә йылына бер тапҡыр булһа ла дауаханаларға барып, сәләмәтлек торошон тикшертергә кәрәк. Әгәр анализдарҙа ниндәйҙер тайпылыш булһа, ентекле тикшереү үтеү зарур. Шул саҡта 100 йәшкә етергә лә мөмкин.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# СИРҘЕ АҘҘЫРМАҺАҠ...

**Февраль башында йыл һайын Бөтә донъя яман шешкә (рак) ҡаршы көрәш көнө билдәләнә. Уның маҡсаты - хәҙерге цивилизацияның иң ҡурҡыныс күренеше булып һаналған ауырыу хаҡында халыҡҡа күберәк мәғлүмәт еткереү, уны асыҡлау һәм дауалау тора. Ошо аҙна башында Республика онкология диспансерының баш табибы Руслан Солтанов журналистар менән матбуғат конференцияһында осрашты.**

Руслан Закир улы белдереүенсә, бөгөнгө онкодиспансерҙа иҫәптә 77 мең кеше тора. Былтыр 11689 кешелә яман шеш барлыҡҡа килеүе асыҡланған. Был 2012 йыл менән сағыштырғанда яҡынса мең ярым самаһы кешегә күберәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, статистика күрһәтеүенсә, сир бер үк кимәлдә ҡалған, йәғни 100 мең кешегә уртаса алғанда 287,8 кеше тура килә. Шуны ла билдәләп китергә кәрәк, сирлеләрҙең дөйөм һанының 47 процентында сир иртә стадияла асыҡланған.

Яман шеш менән сирләүселәрҙең дөйөм һанынан алып ҡарағанда, беренсе урында һөт биҙҙәре яман шеше (12,3 процент) тора, икенсе урында - үпкә рагы (11,4 процент), өсөнсө урында - тире рагы (9,1 процент), артабан ашҡаҙан рагы (8,1 процент), предстата биҙе (7,2 процент), йыуан эсәк (5,7 процент), бөйөр шеше (4,4 процент) китә. Ауыҙ ҡыуышлығы шештәре буйынса хәл-торош насар тиергә мөмкин. Сөнки был осраҡта сир 4-се стадияға еткәс кенә мөрәжәғәт итәләр.

Барлыҡ асыҡланған яман сифатлы шештәрҙең 69 процентан күберәгендә дауалау ауырыуҙы һауыҡтырыуға йүнәлтелә. Уларҙың яртыһына тиерлек операция яһала, 30 проценты самаһына операция һәм нурланыу билдәләнә. 12 процентына бары тик нурланыу ысулы ҡулланыла, 5 процентына химия нурланыуы тәғәйенләнә. Сирлеләрҙең 59 проценты диагноз ҡуйылғандан һуң 5 һәм унан да күберәк йыл йәшәй.

Руслан Солтанов белдереүенсә, баш ҡалала яман шеш менән сирләүселәр һаны дөйөм республика күрһәткесенән юғары һәм 100 мең кешегә 322,9 кеше тәшкил итә (республика буйынса был һан 287,8). Тәү сиратта был ауырыуҙы диагностикалау мөмкинлеге күберәк булыуға бәйле. Сөнки ауыл ерҙәрендә халыҡ үҙ һаулығына иң һуңғы сиктә генә иғтибар бүлә. Ә табиптар әйтеүенсә, иртә стадияла асыҡлағанда, һәр ауырыуҙы дауалау мөмкин. Хатта яман шеште лә.

- Насар сифатлы шеш - күҙәнәктең генетик составы үҙгәреүенә бәйле сир, - ти Руслан Закир улы. - Беҙ яман шеш менән ауырымайбыҙ, ә ошо яман шеш барлыҡҡа килгәнгә тиклем йәшәйбеҙ. Хәл-торошто анализлағанда, ололарҙа яман шеш күберәк асыҡлана. Шуға күрә, яңы барлыҡҡа килгән шештәрҙе иртә стадияла асыҡлау өсөн даими рәүештә табипҡа күренергә, профилактик тикшереүҙәр үтергә кәрәк. Бары тик иртә стадияла дауалау ваҡытын үткәреп ебәрмәҫкә генә кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Матбуғат конференцияһындағы һөйләшеүҙән мәғлүм булыуынса, яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеүҙең 40 процентан күберәк осрағында уны бөтөнләй булдырмаҫҡа мөмкин икән. Бының өсөн сәләмәт тормош алып барырға, тәмәке тартмаҫҡа, спиртлы эсемлектәр эсмәҫкә, физик йәһәттән әүҙем булырға, балансы, сәләмәт ризыҡ менән туҡланырға, ҡояшта саманан артыҡ йөрөмәҫкә, артыҡ ҡыҙынмаҫҡа (бында солярий ҙа инә) кәрәк.**

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Баш һүҙ

Кешеләрҙе нимә лидер артынан эйәрергә мәжбүр итә? Ни өсөн улар бер лидерҙың саҡырыуын ишетмәй, ә икенсеһенең артынан ер сигенә китергә лә риза? Лидерлыҡ теоретиктарын һәм гәмәлдә үҙҙәренең артынан кешеләрҙе эйәрткән лидерҙарҙы нимә айыра? Сәбәбе һәр кешенең характер үҙенсәлектәрендә һәм шәхси сифаттарында.

Ә һеҙ үҙегеҙ хаҡында уйлап ҡарағанығыҙ бармы: лидер булыу өсөн талап ителгән сифаттарға эйәһегеҙме: кешеләрҙе ылыҡтырһығыҙмы һәм һеҙҙең ихтыяр буйынса мөһим эштәр тормошҡа ашырыламы? Мин түбәндәгеләрҙе күҙ уңында тотам: әгәр ваҡыт бүлеп һәм етди рәүештә үҙегеҙҙең эске мөхитегеҙгә ҡараһағыҙ, иң ҡыйыу, бөйөк, хатта бер ваҡытта ла кешегә һөйләмәгән хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн кәрәкле сифаттарҙы ниндәй кимәлдә күрһәтегеҙ? Был, әгәр ысын ҡеүәтендә тулыһынса тормошҡа ашырырға теләһәң, тап һәр ҡайһыбыҙ үҙенә бирергә һәм уға алдашмай яуап ҡайтарырға тейешле һорау.

Был китапты мин ысын, һөҙөмтәле, артынан кешеләр эйәрергә теләгән һәм эйәргән лидер булыр өсөн кәрәкле шәхси сифаттарҙы таныу, үҫтереү маҡсатында яҙҙым. Әлбиттә, лидерға әүерелеү өсөн күп ваҡыт кәрәк. Бер көн эсендә генә лидер булып булмай - ул көндәлек тырышлыҡ талап иткән оҙайлы процесс. Лидерлыҡ сифаттарын үҫтереү ниндәйҙер кимәлдә лидерлыҡ ҡанундарын үҙләштереү һәм уларҙың нисек эшләүен аңлау менән тәьмин ителә. Әммә теоретик булыу һәм кешеләрҙе ысынбарлыкта үҙеңдең артыңдан эйәртеп алып барыу - икеһе ике нәмә.

Мәҡәләләргә башкөлләй сумып, уларҙы бер тынала уҡып сығырға мөмкин тип уйлауығыҙ бар. Шулай ҙа эшләй алаһығыҙ. Әммә ашыҡмай ғына, яйлап уҡығыҙ. Әгәр әлеге ваҡытта өйрәнгән сифат һеҙҙең көсһөҙ ягығыҙ булып тора икән, ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ һәм икенсе сифатҡа күсер алдынан ошо сифатығыҙ менән ныҡлап шөғөлләнегеҙ. Хатта һеҙҙә ниндәйҙер бүлектә яҙылған сифат характерығыҙҙың айырып алғыһыҙ өлөшөнә әйләнһен өсөн был процессы йыл дауамында бер нисә тапҡыр ҡабатлау теләге лә тыуыуы ихтимал.

Барлыҡ үргә артылыуҙар һәм түбән тәгәрәүҙәр ҙә лидерлыҡ менән билдәләнә. Ул, ысынлап та, эске торошта барлыҡҡа килә. Әгәр һеҙ булмышығыҙҙа лидер ниндәй булырға тейеш булһа, шундай булһағыҙ, ысынбарлыкта ниндәй булырға теләйһегеҙ, мотлаҡ шундай буласаҡһығыҙ. Кешеләр һеҙҙең артығыҙҙан эйәрергә теләр. Шулай булған осраҡта һеҙ был донъялағы теләһә ниндәй мәсьәләне лә хәл итә аласаҡһығыҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 10 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Олимпийское утро на "Первом".
09.00 Новости.
09.05 "Женский журнал".
09.25 "Контрольная закупка".
10.00 "Жить здорово!" (12+).
11.05 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Время обедать!"
12.55 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Горные лыжи. Женщины. Суперкомбинация. Скоростной спуск.
14.15 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Продолжение.
14.30, 04.00 "В наше время" (12+).
15.10 "Сочи-2014".
15.45 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Шорт-трек. Горные лыжи. Женщины. Суперкомбинация. Слалом. В перерыве - Новости (с субтитрами).
18.20 "Давай поженимся!" (16+).
19.15 "Пусть говорят" (16+).
20.15 "Время".
20.45 "XXII зимние Олимпийские игры"
23.00 "Энциклопедия зимней Олимпиады".
23.30 XXII зимние Олимпийские игры.
24.00 "Пусть говорят" из Сочи (16+).
01.10 "Вечерний Ургант" (16+).
02.00 "Сочи-2014. Итоги дня".
02.30 XXII зимние Олимпийские игры.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Бомба для Японии. Рихард Зорге".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
10.30, 22.15 "Дневник Олимпиады".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Сила звука". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Пока станица спит".Сериал (12+)
16.00, 17.30 "Ликвидация". Сериал (12+)
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Фродя". Сериал (12+).
20.30 XXII зимние Олимпийские игры в Сочи. Конькобежный спорт. 500 м. Мужчины.
22.45 "Девчата". Ток-шоу (16+).
23.20 "Крейсер "Варяг" (12+).
01.20 "Отпуск за свой счет".
02.40 "Закон и порядок-18" (16+).
03.35 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Замандаштар". Риф Бикбаев (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле халыҡтар йырҙары (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Юлиә һәм Илнар Ҡотдосовтар йырлай (6+)
14.30 "Урғала". Фильм-концерт (6+)
18.00 "Дарман" (03.01.14) (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлли Мөбәрәкова (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 00.15, 06.45 "Замандаштар" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**11.45, 02.00 "Эзель" (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.30 Новости (на баш. яз.).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мелодии души". Поет Шамиль Хамадинуров (12+).**
**14.45 "Автограф. Флюра Талипова" (6+).**
**15.15 "Бауырһаҡ".**
**15.45 "Физ-ра".**
**16.15 "Учим башкирский язык".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО" (6+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**18.00 "Автограф. Михаил Спиридонов".**
**18.55 Хоккей. Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - КХ "Саров" (Саров). Прямая трансляция.**
